ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 ғинуар (һыуығай) 2016

№2 (680)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Маймыл беҙгә йылмайырмы?**



3

**Ҡалабыҙ тураһында...**

эшҡыуарҙар ҙа хәстәрлек күрә



4-5

**Милләт тураһында фекер туплауға...**

милли моң да булышлыҡ итә



8-9

**Башҡорт бейеүендә...**

халыҡтың тарихы ла, күңеле лә сағыла



11

**Бергә булайыҡ!** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Тағы ла бер тапҡыр башланып торған 2016 йыл менән ихлас ҡотлайбыҙ! Быйыл да "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалыуығыҙ, баҫмабыҙҙы фекерҙәшегеҙ, кәңәшсегеҙ, таянысығыҙҙай ҡабул итеүегеҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә ниндәйҙер сәбәптән гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәгәндәр булһа, хәлде ғинуарҙың 17-нә тиклем төҙәтеп була икәнен иҫкәртегеҙсе әле: ул саҡта "Киске Өфө" уларҙың өйҙәренә февралдән килә башлаясаҡ. Артабан да бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Президенты үҙенең йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә ауылдағы мәҙәниәт йорттарын, белем усаҡтарын, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын ябыу маҡсатҡа ярашлы, тип билдәләне. Һеҙҙең дә ошо мәсьәләгә ҡарата фекерегеҙҙе белергә теләр инек...

*Рәсимә АБДРАХМАНОВА, Мәләүез районы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре:* Ил хөкүмәте алдында торған масштаблы бурыстар рәтенә халыҡтың ғүмерен оҙайтыу, үлем осраҡтарын кәметеү, граждандарҙың йәшәү кимәлен яҡшыртыу кеүек мәсьәләләр инә. Ләкин әлеге мәлдә медицина өлкәһенең структураһын үҙгәртергә тырышыуҙар халыҡҡа күрһәтелгән медицина хеҙмәте эшмәкәрлегенә насар яҡтан тәьҫир итә, тигән фекерҙәмен. Бигерәк тә дауахана, бала табыу йорттарындағы урындарҙың һанын ҡыҫҡартыу ауырыуҙарҙы стационар дауалауға алыуҙа ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра. Уның һөҙөмтәһе ҡайһы саҡта ҡот осҡос. Ваҡытында тейешле кимәлдә медицина ярҙамы алмаған ауырыуҙар вафат була, йөклө ҡатындар төрлө бәләләргә осрай.

Ауылдағы һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының эше миндә тағы ла ҙурыраҡ борсолоу тыуҙыра. Ҡайһы бер ауылдарҙа, фельдшер-акушер пункты була тороп та, унда эшләргә теләүсе йәштәр юҡ. Бөгөнгө көндә күпселек ауылдарҙың ФАП-тарында пенсия йәшенә етеп барыусы йәки хаҡлы ялдағылар эшләй. Бер нисә йылдан һуң, әгәр ҙә йәш белгестәрҙе ауылға ҡайтарыу әмәлен тапмағанда, был медицина пункттары ябыласаҡ, тигән һүҙ. Илдә аҡса түләп, фатир йәки өй биреп, йәш медицина белгестәрен ауылға эшкә йәлеп итеү әмәле бара, әлбиттә, ләкин уларҙың бөтәһе лә тиерлек район үҙәгенән ары китмәй. Әйткәндәй, бындай проблема тик медицинаға ғына ҡағылмай, ауылдарҙағы шул уҡ мәғариф, мәҙәниәт өлкәһе лә "йәшәреүҙе" көтә. Юғиһә, уларҙың да киләсәге хәүеф аҫтында.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ОШО БАҪМАНАН АЙЫРЫЛМАЙЫҠ!

**Бөгөнгө мәғлүмәти иркенлек һәм уның күплеге алдында ҡайһы берҙә, ҡайһы матбуғат сараһын һайларға йәки ҡайһыһына өҫтөнлөк бирергә икән, тип баҙап ҡалабыҙ. Үҙең йәшәгән төбәк, республика, ил һәм донъя тураһында объектив фекер йөрөтәм тиһәң, аналитик ҡараштағы материалдарға иғтибар бүләһең. Тиҙләнеш дәүерендә уның формаһы ла осор талаптарына тура килергә тейеш.**

Тап ошондай талаптарға яуап биреүсе баҫма - милли матбуғатыбыҙҙың йөҙөк ҡашына әйләнгән "Киске Өфө" гәзите. Беҙгә, күп балалы ғаилә булараҡ, хатта һәр беребеҙ өсөн генә тәғәйенләнгән рубрикалар, айырым биттәр бар унда. Уларҙың барыһы ла милли рух менән һуғарылған. Иң кесебеҙ Арыҫланға һуңғы биттәге материалдарҙы ҡыҫҡырып уҡыһаҡ, үҫмер ҡыҙыбыҙ Әҙилә әҙәп, матурлыҡ, әхлаҡ тураһында күберәк уҡырға ярата. Йыл буйына барған "Диалог" рубрикаһындағы сығыштарҙан фәһемле һәм файҙалы мәғлүмәттәр туплаһаң, гәзиттә баҫылған әҙәби әҫәрҙәр зауыҡлы уҡыусыға төбәлеүе менән айырылып тора. Гәзиттең һәр темаға объектив ҡарашы, үҙенсәлекле алымдары ла бөгөнгө уҡыусыны йәлеп итә. Мәҫәлән, башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең мәғәнәүи нигеҙҙәрен аңлатып яҙылған мәҡәләләрҙән һуң, минә рухиәтебеҙҙең тағы ла бер ҡатламы асылғандай булды. Шулай уҡ тарихи тема ла һәр саҡ дәлилле алып барыла. "Киске Өфө"лә бирелә барған ҡала, республика, ил һәм донъя яңылыҡтары ла үҙенең мәғлүмәтлеге менән айырыла.

"Киске Өфө" - заман һулышын яҡшы тойған, үҙенә генә хас һуҡмағы булған гәзит ул. Тап ошо һуҡмаҡ ябай уҡыусыны ылыҡтырып, мәңгелек юғалмай торған ҡиммәттәр, рухи ҡиблалар, юғары зауыҡ һәм аң донъяһына алып инә. Шуға ла Яңы йылыбыҙҙы ла ошо гәзит менән ҡаршылаһаҡ, отолмабыҙ, мөхтәрәм дуҫтар!

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты.**




12+

ШИҒРИ҆ ҺҮҘ

2016

## ҺАРЫҠ КИТӘ...

Әле генә килгәйнең дә,
Китәһеңдәме, йылым?
Ишек асып ҡына яптым -
Бик ҡыҫҡа булды юлың.

Әҙ торһаң да күпте ҡылдың,
Харабаларың харап,
Хайран ҡалып йығылырлыҡ
Ҡылғандарыңа ҡарап.
Ҡуй йылы тип көттөрҙөләр,
Кем әйтте, Йәшел Кәзә,
Һарыҡ булдыңмы, Кәзәме -
Булманы бер ҙә мәҙәк.

Кәзә кеүек кәзәләндең,
Кимерҙең "кәбеҫтә"не,
Туҡтауһыҙ мөнтәлә торғас,
Баҡсаның китте йәме,
Аҡсаның китте тәме.
Көтөп торған өмөттәрҙән
Мөгөҙ ҙә тояҡ ҡалды.
Һарыҡ кеүек баҡыраҡтар
Эфирҙы баҫып алды.

Һарыҡмы һин, кәзәме һин,
Баҡырҙың донъя ярып...
...Йыл - булһын! Тик яһамағыҙ
Халыҡтан ҡара һарыҡ...

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

## МАЙМЫЛ ЙЫЛЫ

Яңы йыл сәғәте һуҡһа,
Ырғандар ҙа һикерер,
Күҙҙәренән өмөт сәсеп,
Ни теләйһең - килтерер.

Ни теләйһең, тигәстен дә,
Таптырмағыҙ алтын тау;
Алтын тауҙар кәрәк түгел,
Булманыңмы иҫән-һау.

Алтын ғына ғүмеркәйҙәр
Булмаһын тиһәң, көмөш,
Шатлығын да, ҡайғыһын да
Ауыҙ итергә тейеш.

Шатланғанда, йылмая бел,
Ауыҙ еһен ҡолаҡҡа;
Ҡайғы килһә, һеңдерә бел,
Турһайма бик оҙаҡҡа.

Маймыл - беҙҙең ата-баба,
Тиеүҙәргә ышанмай
Йәшәһәк тә, әҙәмдәргә
Ятып булмай ҡымшанмай.

Ҡымшанабыҙ, ҡыланыштар
Хаттин аша, ай, туған;
Берәү битен берәү йырта:
"Әҙәм түгел - хайуан".

Маймыл йылы өйрәтһәсе
Маймылланмай йәшәргә.
Әҙәм әҙәм булһын өсөн,
Әйтсе, маймыл, нишләргә?

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Президенты үҙенең йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә ауылдағы мәҙәниәт йорттарын, белем усаҡтарын, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын ябыу маҡсатҡа яраҡһыҙ, тип билдәләне. Һеҙҙең дә ошо мәсьәләгә ҡарата фекерегеҙҙе белергә теләр инек...



(Башы 1-се биттә).

***Зифа ҒАЙНАНОВА, уҡытыусы:*** Мәктәп, мәҙәниәт усағы, фельдшер-акушер пункты һәр ауылдың - бәләкәй булһынмы ул, ҙурмы - йөрәге. Ләкин һуңғы йылдарҙа илдә әүҙем рәүештә алып барылған оптималләштереү реформаһы ауылдарҙың тынын быуа, уларҙы яйлап бөтөүгә этәрә. "Оптималләштереү" - мәтур, яңғырауыҡлы һүҙ, әлбиттә. Һүҙлектәр ҙә, һөйләшеп эш иткәндәй, уны бер төрлө мәғәнәлә тылҡый - "күпселек варианттың иң яҡшыһын һайлау". Тик өҫтә ултырыусылар уны үҙҙәренсә аңлай, буғай, һәм бихисап мөмкин булған варианттың иң насарын һайлап тормошҡа ашыра кеүек. Ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа әллә күпме мәктәптәрҙең ябылыуын, ауыл халҡы өсөн берҙән-бер мәҙәни үҙәк булған клубтарҙың бикләнеүен, фельдшер пункттарының буш тороуын башҡа төрлө аңлатып булмай, миненсә. Ил - бәлемле, һау, шат-көләс халҡы менән көслө. Ошоно һаман аңламайбыҙ.

Ауылдағы мәктәп һәм башҡа социаль объекттарҙың ябылыуы ҡыҫҡартыуға эләккән йәки эшенән бушатылған бер кеше өсөн генә түгел, ә уның тотош ғаиләһе өсөн ҙур бәлә. Быны үҙемдең миҫалдан сығып иҫбатлайым. Ошондай "оптималләштереүҙән" һуң, йәш баламды райондағы әсәйем ҡулына ҡалдырып, Өфөгә эшкә килдем. Эш хаҡым булмә өсөн ҡуртымға түләүҙән, ашау-эсеүҙән артмай. Ә әсәйем мине тәрбиәләп үҫтереп, хәҙер рәхәтләнеп ял итеү урынына ейәнен ҡарарға мәжбүр. Был, миненсә, уға ҡарата рәхимһеҙлек, ләкин хәлдән сығыу юлын күрмәйем.

Был ситуацияның тағы бер парадоксы - педагогик уҡыу йорттарына ҡабул ителеүсе студенттар һанының үҙгәрмәүе. Уйлап ҡарағанда, әгәр ҙә илдә мәктәптәр ябыла икән, тимәк, был һөнәргә уҡығандарҙың һаны ла кәмергә тейеш түгелме ни? Меңәрләгән студент киләсәктә һатыусы, тәрбиәсе, ашнаҡсылар рәтен тулыландырыу өсөн биш йыл дауамында белем аламы ни?..

***Наил БИКМУРЗИН, шәхси эшҡыуар, Сибай ҡалаһы:*** Президент үҙенең сығышында алдағы 10 йылда илдәге мәктәп уҡыусыларының һаны 3,5 миллионға күберәк буласаҡ, тип белдерҙе. Ә ул миллионлаған баланың барыһы ла ҙур ҡалаларҙа һәм ҡасабаларҙа тыумай. Киреһенсә, тыуымдың артыуы нәҡ ауылдарҙа, бәләкәй ҡалаларҙа күҙәтелә. Тимәк, уларға йылы, коммуналь хеҙмәттәр менән тулыһынса тәьмин ителгән мәктәптәрҙә үҙ эштәренең оҫтаһы булған уҡытыусылар ҡулында белем алырға кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ халыҡтың артыуы профессиональ белемле врач һәм шәфҡәт туташтарының етерлек кимәлдә булыуын да алғы планға ҡуя. Ә мәҙәнилекте тәрбиәләүҙә урындағы мәҙәниәт йорттарының әһәмиәтен билдәләмәйенсә булмай. Президент үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә Хөкүмәт алдына мәктәптәрҙә өҫтәмә урындар булдырырға, ағымдағы йылдың 1 мартына тиклем ауылдарҙа социаль өлкәгә ҡараған учреждениеларҙы урынлаштырыуҙың илдең бөтә төбәктәре өсөн дә оптималь булған әмәлен раҫларға, тигән дөрөҫ һәм урынлы талаптар ҡуя. Ләкин, миненсә, мәктәптәргә өҫтәмә урындар ғына булдырыу балаларға төплө белем биреү мәсьәләһен хәл итмәйәсәк. Быныӊ өсөн әлегә тиклем эшләргә мөмкин булып та ябылған белем усаҡтарын яңынан тергеҙеү кәрәк буласаҡ. Мәктәбе булған ауылдың киләсәге лә өмөтлө. Ә ауыл, һәр ваҡытта ла, бөтә илде туйындырыусы булып тора. Шуға күрә ауылдарҙың юҡҡа сығыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Беҙҙең индә яткан тәү бурыстарҙың береһе - илебеҙҙең лайыҡлы граждандары булырлыҡ белемле, һау-сәләмәт, мәҙәниәтле һәм әҙәпле балалар үҫтереү. Ләкин, бөгөнгө кеүек, мәктәп, клуб, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын ябыу күренеше артабан да дауам итһә, яҡын киләсәктә был хатабыҙ өсөн оло үкенеүҙәргә дусар буласаҡбыҙ. Быға юл ҡуйырға ярамай, замандаштар. Шуға күрә, Президентыбыҙҙың мөһим социаль объекттарҙың ябылыуын маҡсатҡа яраҡһыҙ, тип билдәләүен ҡуш ҡуллап күтәрәм. Был һүҙҙәрҙең ысынбарлыҡта реаль эштәргә әйләнеүен көтәм.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

## ЗАРЛАНМАЙЫҠ!

Тормош ризаһыҙлыҡтарҙы яратмай - күп тапҡырҙар һынағаным бар быны. Әгәр ҙә һин оҙаҡ ваҡыт һөмһөрөңдө ҡойоп, ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөйһөң икән, донъя һине "тәрбиәләй" башлай. Йәғни оло һынауҙар ебәрә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ошо хәҡиҡәтте йылдар үткәс кенә, юғалтыуҙар, хаталар аша ғына аңлайһың шул. Быға ышандырыр әллә күпме миҫалдар килтерергә булыр ине. Мәҫәлән...

Бик оҙаҡ йылдар был апайҙың теленән "Уф, ауырыйым" тигән зар төшмәне. Бер үк ваҡытта ҡаты ауырығанға ла оҡшамағайны, үҙ аяҡтары менән атлап йөрөнө, үҙ ҡулдары менән ниндәйҙер эш башҡарҙы, ғаиләһен көттө. Ә берҙән-бер көндө ул дауалап булмай торған ҡаты сиргә тарыны, операция яһатты. Бына шунда ул үҙенең элекке хәленә шөкөр итмәгәненә үкенеп ятты: "Калай юҡҡа зарланғанмын, шуға Хоҙай сирҙең ҡатырағын ебәрҙе бит миңә", - тине. Был хәл минең үҙемә лә ғүмерлек һабаҡ булды...

Һабаҡтар булып тора ул. Тик уларҙан ғибрәт ала белергә генә кәрәк. Ризаһыҙ булған саҡтарыңда үҙ-үҙеңә шундай һорау ҡуй: зарҙарыңды кемгәләр түгеү, насар кәйефеңдә белгертеү берәй ваҡыт һинең проблемаңды ыңғай хәл иттеме? Кемдер һине йәлләп, һинең ауыртыныуҙарыңды ҡулы менән һыпырып ташлағандыр, бәлки? Юҡ, әлбиттә. Унан һуң... Һине бөгөн бик ныҡ үртәгән проблемаңың иртәгә, иртәнән һуңға битарафлыҡ тыуҙырыуы, хатта көлкө тойолоуы ла ихтимал бит. Шулай булғас...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһының төбәк бүлексәһе конференцияһында сығыш яһап, 2016 йылда үтәсәк Дәүләт Думаһына һайлауҙар ғәҙел һәм асыҡ булырға тейешлеген билдәләне. "Республикала 86 меңдән ашыу кеше "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзаһы булып тора. Был, ысынлап та, ҡеүәтле көс, бик күпте эшләргә мөмкин, - тине республика етәксеһе. - Бөгөн йәмғиәтте туплауға, ҡуйылған бурыстарҙы үтәү өсөн кешеләрҙе йәлеп итеүгә бәйле мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк. Ошо йәһәттән Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһы ҙур эш алып бара".

✓Башҡортостанда һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары менән эшләү буйынса ойоштороу комитеты булдырыла. "Башҡортостан илдең иң күп ветерандар йәшәгән һигеҙ төбәге иҫәбенә инә - 67 мең самаһы. Беҙ улар оҙағыраҡ ғүмер итһен, беҙҙең хәстәрлекте һәм иғтибарҙы тойһон өсөн артабан да шарттар булдырасаҡбыҙ", - тине республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерләнеү һәм уны байрам итеү буйынса республика ойоштороу комитетының йомғаҡлау ултырышында.

✓Ошо ултырышта Башҡортостандың Төҙөләш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мөхмүтов Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын фатир менән тәьмин итеү буйынса эштең торошо менән таныштырҙы. Мәҫәлән, 2015 йылдың 1 ғинуарына Башҡортостанда 1 640 кеше торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандар исемлегендә иҫәптә торған. Ғинуарҙан декабргә тиклем йәнә 728 кеше өҫтәлгән. Шулай итеп, 2015 йылдың 1 декабренә торлаҡ менән тәьмин ителмәгән ветерандар һаны 936 кеше тәшкил иткән. Быйыл федераль бюджет аҡсаһына мохтажлыҡ 1,2 миллиард һум тәшкил итә.

✓Ултырышта шулай уҡ республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының беренсе урынбаҫары Рөстәм Вәлиев Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын медицина һәм социаль хеҙмәтләндереү хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Уның билдәләүенсә, бөгөн 56 мең ветеран диспансер иҫәптә тора. Улар өҫтәнлекле тәртиптә медицина ярҙамы һәм дарыуҙар менән тәьмин ителә. 371 ветеранға шифахана-курорт хеҙмәттәре күрһәтелгән. Әммә 400 кеше дауалана алмаған.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# МАЙМЫЛ БЕҘГӘ ЙЫЛМАЙЫРМЫ?

**Мәғлүм булыуынса, 2016 йылда эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы индексацияланмаясаҡ. РФ Президенты В. Путинға уның 17 декабрҙәге матбуғат конференцияһы ваҡытында пенсия йәшен оҙайтыу хаҡында һорау бирелгәс, тәүҙә ул пенсияны индексациялау мәсьәләһенә туҡталып китеүҙе кәрәк тапты. Йыл башынан пенсия 4 процентҡа индексацияланасаҡ, тине ул. "Ә бына эшләп йөрөгән һәм эшләмәгәндәр хаҡында, дөрөҫөн әйткәндә, унынын хәтерләмәйем. Мотлаҡ асыҡлармын. Ләкин, минең ҡарашҡа, бөтөн пенсионерҙар - эшләгәндәре һәм эшләмәгәндәре өсөн дә дөйөм тәртип булырға тейеш," - тигәйне Президент.**



Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, шулай булырға тейештер ҙә, ләкин Хөкүмәт мәсьәләне башҡасараҡ хәл итеп өлгөрҙө. Ярай инде, 4 процент өсөн хәҙер ҡырталашып булмай, Хоҙай һаулыҡ бирһен, тип, дарман барҙа, ә иң мөһиме - кәрәгең барға ҡыуанып, эшләргә, әҙ булһа ла файҙа килтерергә тырышырға кәрәктер. Беҙҙең быуын шулай тәрбиәләнде: ваҡыт уҙҙырып, ыштан туҙҙырып тигәнсә түгел, ә тырышып эшләргә, эшебеҙҙең һөҙөмтәһен күреп шатланырға өйрәндек. Юғиһә, эштә әлегесә ыштан туҙҙырып ултырыусылар элек тә булды, бөгөн дә бар. Кемдәр, тиһегеҙме? "Өҫтәлдәге ҡағыҙҙарҙы бер урындан икенсе урынға күсереп һалып ултырыусылар", тип көләләр ине уларҙан элек тә. Чиновниктар улар. Төрлө кимәлдә бер-береһенә дублер булып ултырыусы күп һанлы дәүләт хеҙмәткәрҙәре. Һәр төрлө министрлыҡтарҙы ғына алып ҡарағанда ла, асыҡ күренә: бүлек етәксеһе, бүлектең баш белгесе, әйҙәүсе белгесе, кәмендә ике-өс ябай белгес һәм башҡалар... Ә улар байтаҡ беҙҙә: Финанс, Һаулыҡ һаҡлау, Иҡтисади үҫеш, Ауыл хужалығы, Хеҙмәт һәм социаль яҡлау, Мәғариф һәм фән министрлыҡтарында. Уларҙан ҡала - муниципаль хеҙмәткәрҙәр. Был ведомстволарҙа һәр бүлек белгестәр менән нышып тултырылған, ә файҙа юҡ - тармаҡтарҙа эш һис алға бармай. 2014 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙә 10 мең кешегә108 дәүләт хеҙмәткәре тура килһә, Һиндостанда - 29, Ҡытайҙа - 72, АҠШ, Германия, Испанияла - 100-110. "Беҙгә йыйнаҡ, һөҙөмтәле эшләүсе аппарат кәрәк", тине Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Д. Медведев. Көрсөккә бәйле генә түгел, бынан алдараҡ та дәүләт хеҙмәткәрҙәрен 20 процентҡаса ҡыҫҡартыу хаҡында һүҙ алып барылғайны, тине ул. Ләкин, ахырыһы, был сара ҡайҙа - үтәлгән, ә ҡайҙа уны бар тип тә белмәгәндәр. Был юлы инһә Медведев 2016 йылдың 1 ғинуарынан дәүләт аппараты хеҙмәткәрҙәрен 10 процентҡа ҡыҫҡартыу тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы һәм үҙенең урынбаҫарҙарына уның үтәлешен контролдә тоторға ҡуштыы. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, илдә дәүләт хеҙмәткәрҙәре һаны 710 меңдән ашыу кеше тәшкил итә. Тимәк, ҡарар үтәлә ҡалһа, 71 мең кеше икенсе эш менән тәьмин ителергә тейеш була. Эшһеҙҙәргә эш булмаһа ла, быларға урын табылыр. Рәсәйҙә бит, ғәҙәттә, шулай эшләнә. Уның "формулаһы" нисек әле? Урындарҙы алмаштырыу менән һөҙөмтә үҙгәрерме - проблема бит бына шунда.

Һүҙҙе пенсияларҙы индексациялауҙан башлағайным бит әле. Фекер ебен шул ҡыҫҡартыу тигән нәмәгә ялғарға итә инем дә. Был сара пенсия күләменә йә булмаһа, ябай эшсе һәм хеҙмәткәрҙең эш хаҡына ҡағылһа ғына шундуҡ тормошҡа ашырылып та ҡуя. Пенсионер алған 10 мең аҡса эш хаҡын 50 тапҡырға күберәк алған юғары чиновниктарға, депутаттарға тынғы бирмәй бит һис тә. Ниндәй генә "ҡайсы" менән ҡыҫҡартып ҡарамайҙар: индексациялауҙы киҫеү, "ЖКХ", ОДН, "Капремонт" тигән бирәндәрҙе һөслөтеү... Шул 10 меңде күмәкләп талайҙар. Ә бына "Роснано" кеүек компанияла "тир түгеүсе" һәм миллионлап эш хаҡы алыусы "хеҙмәт коллективы" 2 миллион 240 меңгә Яңы йыл кисәһе ойошторор, типтереп ята икән. "Аҡса беҙҙә бик күп, корпорацияла эшләүсе һәр хеҙмәткәргә икешәр премия яҙырлыҡ мөмкинлегебеҙ бар", тип маҡтана икән ошо мәжлестә А. Чубайс. Рәсәй фәне үҫешенә бер тинлек файҙаһы булмаған компания был тиклем килемде ҡайҙан ала һуң? Күренеүенсә, эшләмәй генә ала! Рәсәй аҡсаһы осһоҙланғас, был дәүләт компанияһының сит илдәге активтары һумға әйләндереүҙән икеләтә ҡиммәтләнгән. Өҫтәүенә, вкладтар буйынса процентттар ҙа ағыла. Бына нисек майҙа-балда ғына йөҙә беҙҙә элиталы дәүләт хеҙмәткәрҙәре. Ә ундайҙар илдә бер "нано" ғына түгел... Йот мәлендәге туй, тиҙәрме?

Әйтер һүҙҙе күңелһеҙ нотала тамамлағы килмәй шулай ҙа. Донъяла изгелек, ғәҙеллек тигән нәмә булһа, бәлки, маймыл беҙгә яҡшы хәбәрҙәр алып килер? Аллаһының "Амин" тигәненә тура килеп, бойомға аша ҡалһа, 2016 йылдың 1 апреленән, имеш, ОДН тигән нәмә урынына нормативтар булдырыла икән, тигән имеш-мимеш йөрөй. Тик баяғы 1 апрель тигәне генә шик тыуҙыра: баяғыса, урындарҙы, пункттарҙы ғына алмаштырып ҡуйыу булмаҫмы был? Һөҙөмтәлә "сумма" шул уҡ ҡаласаҡ ...Бына бит, яҡшы хәбәр тигәнде онотоп, күңел ҡатып киткән, бер нәмәгә ышанғы килмәй хәҙер. Ошо көндәрҙә генә В. Путин капремонтҡа түләүҙә ғәриптәргә, оло йәштәге ҡайһы бер пенсионерҙарға 50 процент ташлама тураһындағы Законға ҡул ҡуйҙы. Яңы йылыбыҙҙың яҡшы хәбәрҙәр менән башланыуы хәйерле. Артабан да шулай булһын, тип теләйек.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# СИКЛӘМӘЙЕК ҮҘЕБЕҘҘЕ!

***Вилдан ҒӘЛИН, "Башҡортостан" дәүләт телерадио каналының милли тапшырыуҙар бүлеге етәксеһе:*** Бөгөнгө көндә милләттәштәрҙең иң төп маҡсаты - берҙәм һәм белемле булыу, заман менән бергә атлау һәм үҙенә сиктәр ҡуймау. Тимәк, бер-беребеҙгә ҡарата ихтирамлыраҡ, иғтибарлыраҡ булырға, мөмкин тиклем ярҙамлашырға һәм милләт яҙмышына ҡағылышлы барлыҡ мәсьәләләрҙе уртаҡ көстәр ярҙамында хәл итергә тырышыу кәрәк. Берҙәмлек - ул халыҡтың бер бөтөн булып ойошоуы. Ҡарты ла, йәше лә халыҡ мәнфәғәтен ҡайғырта икән, бер йүнәлештә, кәңәшләшеп эшләп өйрәнергә тейеш.

Берҙәмлекте булдырыуҙың юлдары төрлө, шулай ҙа иң мөһим шарт - халҡыбыҙҙың тарих биттәренән фәһем, һабаҡ алырға кәрәк. Башҡорт халҡының тарихи үткәне таҡыр юлды хәтерләтмәй, киреһенсә, һикәлтәләре лә күп булған, хаталанған осраҡтар ҙа етерлек. Беҙ шул хаталарҙы иҫәпкә алып эш иткән осраҡта һәм уларҙы төҙәтеү арҡылы ғына берҙәм йәшәү асылына төшөнә алаsаҡбыҙ. Бынан бер-нисә йыл элек яһалған хата булһынмы, былтыр яңылышҡанбыҙмы - барыһын да иҫәптә тотоу кәрәк.

Шунан тағы ла заман менән бергә атлау кәрәк, тигәйнем. Башҡорт кешеһенә донъя кимәлендәге юғары технологияларҙы өйрәнеү, сәйәсәт һәм иҡтисад өлкәләрендәге үҫеш һәм яңырыу процестарынан артта ятып ҡалмау шарт. Бының өсөн үҙаллы камиллашырға, йәштәргә юғары белем алырға, республика мәнфәғәтенә йүнәлтелгән эштәр атҡарырға, мобиль булырға һәм бөтә мәғлүмәт уртаһында ҡайнап йәшәргә кәңәш итәм. Әлбиттә, уныш ҡаҙанам, тигән кеше үҙенә бер ниндәй ҙә сиктәр ҡуймаҫҡа бурыслы. Бала саҡтан уҡ үҙебеҙҙе ата-әсәләребеҙҙең, шул ярамай, был хәлдән килмәй, тип сикләүенән баҫылып, артабан үҙебеҙ уҡ уйлап тапҡан шартлы тормошта йәшәй башлайбыҙ. "Башҡортмон" тигән һәр замандаш үҙенең зиһенендәге кәртәләрҙе емерә алһа, ул төрлө кимәлдәге сиктәрҙе (географик, белем алыу һ.б.) юҡ итә. Шунда уҡырға барыр инем, ҡулымдан килерме, шул эшкә тотонор инем, булдырырмынмы, тиеп сикләүҙәргә урын ҡалмай. Ошо шарттарҙы үтәп, берҙәм һәм үҙенә бер ниндәй ҙә сиктәр ҡуймаған йәштәр тәрбиәләһәк, был еңел булмаған заманда милләт булараҡ һаҡланып ҡаласаҡбыҙ. Әйтергә кәрәк, хәҙерге мәлдә беҙгә милли үҙаңыбыҙҙы юғалтмау өсөн төп шарттар булдырылған - үҙ республикабыҙҙа йәшәйбеҙ, үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ. Ҡалғаны тик үҙебеҙҙән тора.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ҡарттарға пенсия 2016 йылдың 4 ғинуарынан таратыла башланы. 5 ғинуарҙан 10-на тиклем пенсия почтаның эш режимын иҫәпкә алып түләнә. 11 ғинуарҙан пенсия ғәҙәти тәртип буйынса килтерелә. "Бүлексә 1 миллион 141 мең пенсионерға пенсия түләй. Уларҙың 46 проценттан күберәге - почта элемтәһе ойошмалары, 53 проценттан ашыуы кредит ойошмалары аша хеҙмәтләндерелә", - тип белдерҙе Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идарасыһы Фоат Хантимеров.

✓26 һәм 27 декабрҙә Өфө, Күмертау, Нефтекама, Благовещен, Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаларында һәм Мәләүез районында ауыл хужалығы йәрминкәләре уҙҙы. Уларҙа тәбәк аграрийҙары 68,8 миллион һум аҡса эшләгән. Республика Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, продукцияны һатыу өсөн 1799 сауҙа нөктәһе ойошторолған. 26 декабрҙә Өфөлә - 13, 27-лә 11 майҙансыҡ эшләгән. 46 районддың ауыл хужалығы етештереүселәре ит, йәшелсә, еләк-емеш, бал килтергән.

✓26 декабрҙә баш ҡалала Беренсе ит фестивале үтте. Унда республиканың 25 аҙыҡ-түлек һәм эшкәртеүсе сәнәғәт предприятиеһы, шулай уҡ төбәктең 38 районынан 120-нән ашыу ауыл хужалығы етештереүселәре ҡатнашты. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары Яңы йыл табынына ҡош ите (ҡаҙ, өйрәк, күркә, тауыҡ), колбаса изделиелары, ит деликатестары, шулай уҡ яңы һуйылған һыйыр, йылҡы, һарыҡ, сусҡа ите һатып алды. Ауыл хужалығы етештереүселәре дөйөм суммаһы 13,5 миллион һумлыҡ 40 тоннаға яҡын ит һәм 6,7 тонна ҡош ите алып килгәйне. Фестивалгә 15 меңдән ашыу кеше килде.

✓Республиканың һуҡырҙар өсөн махсус китапханаһында балалар шағирәһе, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, филология фәндәре кандидаты Рәсимә Ураҡсинаның "Тыуған ерем - торған ерем" исемле китабы донъя күрҙе. Китап ике форматта - Брайль шрифты менән һәм электрон вариантта башҡорт һәм рус телдәрендә баҫылған. Баҫма "Башҡортостан Республикаһында Рәсәй милләтенең берҙәмлеген нығытыу һәм халыҡтарҙың этномәҙәни үҫеше" дәүләт программаһы сиктәрендә ғәмәлгә ашырылған.

**"Башинформ"дан.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим районы.** Александровка, Тынысылыҡ һәм Татыулыҡ урамдарында һыу менән үҙәкләштерелгән тәьминәт булмауы районДың иң ҙур проблемаларының береһе ине. Әлеге көндә был мәсьәлә хәл ителә. Был урамдарҙа йәшәүселәр төҙөлөштөң проект-смета документтарын үҙ иҫәптәренә эшләткән. Бөгөнгә 2 километр оҙонлоҡта торба һалынған, ҡайһы бер йорттарға һыу килә лә башлаған. Киләсәктә тағы ла 2,4 километр торба үткәреү ҡүҙаллана.

**Киров районы.** Яңы йыл алдынан һәр ерҙә боҙ ҡаласыҡтары асылды. Район оҫталары төҙөгән боҙ батшалығы үҙенең хәүефһеҙлеге, биҙәлеше, берҙәм тематик концепцияһы булыуы менән ял итеүселәрҙең генә түгел, ҡабул итеү комиссияһының күңеленә лә хуш килде. Сер итеп кенә әйткәндә, ҡаласыҡта хыялдарҙы тормошҡа ашырыусы тәхет менән лабиринт та бар. Мөғжизәгә ышанаһығыҙмы? Хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырғығыҙ киләме? Райондың серле боҙ майҙансығына рәхим итегеҙ!

**Совет районы.** Башҡортостандан 2015 йылда Мәскәүҙә Еңеү парадында ҡатнашыусы берҙәнбер Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Сәғит Ишбирҙин үҙенең 90 йәшлек юбилейын билдәләне. Уны оло байрамы менән Өфө ҡалаһы хакимиәтенең социаль сәйәсәт идаралығы етәксеһе Светлана Ғәлиева ҡотланы һәм Владимир Путиндың тәрбикләү хатын, Ирек Ялаловтың бүләген тапшырҙы.

**Ленин районы.** Ҡала халҡының күпселеге ҡышты һырғалаҡта йөрөү өсөн көтөп ала. Саф һауала булыуҙың бындай ысулы хәҙер район халҡы өсөн дә ауыр мәсьәлә түгел, сөнки Затонда "Тулҡын" паркында, Осоусылар урамы 8/2, 8 Март ҡасабаһында Ватанды һаҡлаусылар урамы, 17 һәм "Нижегородец" стадионында боҙ майҙандары асылды. Ә инде саңғы шыуырға яратыусылар өсөн "Водник" стадионында ике километр оҙонлоғондағы трасса әҙерләнгән. Малайҙар иһә хоккей ҡумталарында шайба артынан йүгерә ала.

**Октябрь районы.** 40-сы мәктәптең геология музейында Ҡаҙағстан Республикаһы Көнбайыш Ҡаҙағстан өлкәһенең туристик үҙәктәре етәкселәре делегацияһының осрашыуы үтте. Осрашыу барышында ҡунаҡтар "Контакт" геология клубының, геология музейының эшмәкәрлеге менән танышты, үҙҙәренең тәжрибәһе менән бүлеште.

**Орджоникидзе районы.** Сочиҙа "Рәсәйҙең йәш интеллектуалдары" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы "Рәсәйҙең Олимпия иртәгәһе" VIII Бөтә Рәсәй спорт-мәғариф йәштәр форумы сиктәрендә дөйөм белем биреү учреждениеларының кадет кластары командаларының Ҡышҡы йыйындарын уҙғарҙы. Унда 116-сы мәктәптең 14 кешенән торған "Ҡотҡарыусы" командаһы "Иң йондоҙло команда" кубогын һәм "Бында йондоҙҙар ҡабына" иң яҡшы команда кубогын яуланы.

**Калинин районы.** 52-се лицейҙа Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөнә арналған "Исемең һәм ғәмәлдәрең онотолманы, Аҡмулла!" тип аталған берҙәм дәрес үтте. Унда 175 уҡыусы ҡатнашты. Балалар М. Аҡмулланың ижады менән танышты, уның остаздары һәм уҡыусылары хаҡында мәғлүмәт алды, бөйөк мәғрифәтсенең исеме нисек мәңгеләштерелеүе һәм уның башҡорт халҡы тарихындағы әһәмиәте тураһында белде.

*ЕТӘКСЕ ҺҮҘЕ*

# ҠАЛАБЫҘ ТУРАҺЫНДА...

## эшҡыуарҙар ҙа хәстәрлек күрә



**Үҙенең һәр сығышында тиерлек ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Өфөнө Рәсәйҙең иң яҡшы ҡалаларының береһенә әүерелдереү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был йүнәлештә ҡайһы бер мәсьәләләрҙе дәүләт, муниципалитет ҡына түгел, шәхси эшҡыуарҙар ҙа хәл итеп, ҡаланың яңы йөҙөн булдырыуға үҙ өлөшөн индерә ала. Бөгөн илдә шәхси-дәүләт, муниципаль-дәүләт партнерлығы киң ҡолас алғанда, Өфөнөң ниндәй позицияла тороуын асыҡлау өсөн ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдар ХӘСӘНОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

### Ике яҡҡа ла файҙалы эшмәкәрлек

Күпселек эшҡыуарҙар муниципаль, дәүләт-шәхси партнерлыҡты үҙҙәренең шәхси инвестицион проекттарын тормошҡа ашырыуҙа дәүләт ярҙамы алыуға өлгәшеү, ер участкаларына конкурсты һәм ерҙе һатып алыу өлкәһендәге ҡануниәтте урап үтеү мөмкинлеге итеп күрә. Әммә дәүләт-шәхси партнерлығы - бизнесты, уның финанс ресурстарын һәм идара итеү тәжрибәһен муниципаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлдереү, социаль проекттарҙы ике яҡҡа ла файҙалы булған нигеҙҙә тормошҡа ашырыуҙы, компетенцияларҙы, хәүефте һәм яуаплылыҡты аныҡ бүлеү ул. Бөгөн республикала һәм баш ҡалала дәүләт-шәхси партнерлығын тормошҡа ашырыу буйынса норматив база булдырылған. 2012 йылда 2008 йылда башланған "Өфө ҡалаһы территорияһында социаль һәм инженер инфраструктуралары объекттарын төҙөү" төбәк инвестиция проекты тамамланды. Уны тормошҡа ашырыуға РФ Инвестиция фонды саралары файҙаланылды, шулай уҡ республика һәм ҡала бюджеты аҡсаһы менән бер рәттән, шәхси инвестор аҡсаһы йәлеп ителде. Проекттың дөйөм ҡаҡы 3 миллиард һумдан ашыуыраҡ. Һөҙөмтәлә ҡаланың таҙартыу ҡорамалдарының ҡеүәте тәүлегенә 500 мең куб метрға тиклем артты һәм таҙартылмаған һыуҙарҙың Ағиҙел йылғаһына ағыуы тулыһынса туҡтатылды.

2014 йылда муниципаль ҡарамаҡтағы мәҙәни мираҫ объекттарын (Пушкин урамы, 110, К. Маркс урамы, 45 адрестары буйынса) реставрациялау һәм һаҡлау маҡсатында инвестициялар йәлеп итеү буйынса конкурс уҙғарылды. Былтыр ноябрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте муниципаль-шәхси партнерлыҡ килешеүенә хоҡуҡ биреүсе ике асыҡ конкурс иғлан итте. Уларға ярашлы инвестор табылһа, Аврора урамы, 17/1 һәм Софья Перовская урамы, 13/2 адресындағы айырым биналар реконструкцияланасаҡ. Конкурста Рәсәйҙең һәм сит илдең ойошмалары ғына түгел, шәхси эшҡыуарҙар ҙа ҡатнашырға хоҡуҡлы. Киләсәктә хакимиәт муниципаль-шәхси партнерлыҡҡа нигеҙләнгән инженер инфраструктураларын үҫтереү, юл-транспорт өлкәһе, мәғариф, спорт һәм физик культура объекттарын төҙөү һәм реконструкциялау буйынса инвестиция проекттарын тормошҡа ашырырға ниәтләй.

### Дәүләт-шәхси партнерлыҡ төрҙәре

Дәүләт-шәхси партнерлыҡты тормошҡа ашырыу формалары төрлө. Ул шәхси капиталдың дәүләт һәм муниципаль предприятиеларға өлөшсө булып ҡатнашыуы ла, үҙ-ара бәйләне-

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# БРЕНДТАРЫБЫҘҘЫ БАРЛАЙЫҠ!




**Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ ҡалаһында "Ҡатын-ҡыҙ. Әҙәбиәт. Тормош" республика фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғарылды. Конференцияла төрлө өлкә белгестәре ҡатнашты, улар йәмғәтселекте борсоған бик күп мәсьәләләр буйынса фекер алышты, хәл итеү юлдарын барланы. Күҙ менән ҡаш араһында ауыҙ тултырып "Ҡыш бабай" тип һөйләү мөмкинлегенән ҡолаҡ ҡаға яҙған ваҡытта БДУ-ның патенттар бүлеге етәксеһе Гүзәл Шәңгәрәеваның башҡорт халҡының рухи һәм матди байлыҡтарын патентлау, брендҡа әйләндереүгә арналған сығышы айырыуса иғтибарҙы йәлеп итте.**

Билдәле булыуынса, Европа илдәрендә 19-сы быуатта уҡ интеллектуаль милекте теркәү, яҡлау буйынса законДар ҡабул ителә башлай. Тәүгеләрҙән булып сәнәғәт өлкәһендәге милек тураһында 1883 йылғы Париж конвенцияһы ғәмәлгә инә, унан һуң әҙәби һәм художестволы әҫәрҙәргә авторлыҡ хоҡуҡтарын яҡлау буйынса Берн конвенцияһы төҙөлә. Ә бына бөгөн беҙ "бренд" тип йөрөткән тауар тамғаһы, маркаларҙы теркәү тәртибен Халыҡ-ара тамғаларҙы теркәү тураһындағы Мадрид килешеүе яйға һала. Ғөмүмән, төрлө интеллектуаль милек төрлөсә һаҡлана. Әйберҙе уйлап табыусы кеше уға патент, йә таныҡлыҡ эшләтеп хужа була ала. Әлеге көндә был өлкәләге бөтә мәсьәләләр менән патент вәкилдәре шөғөлләнә, улар уйлап табыусының авторлыҡ хоҡуғын раҫлау эшен атҡара.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда Яңы йыл табыны өсөн аҙыҡ-түлек хаҡы иҫәплəп сығарылған. Башҡортостанстат баһалары буйынса, 2015 йылдың декабрендә Яңы йыл табыны өсөн аҙыҡ-түлектең уртаса хаҡы 4769,20 һум тәшкил иткән. Был 2014 йылдың декабренә ҡарағанда 15,2 процентҡа күберәк (4139,26).

✓Илмар Әлмөхәмәтов Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының генераль директоры итеп тәғәйенләнде. Илмар Әлмөхәмәтов - режиссер, драматург, ҡурсаҡ театры өсөн бер нисә пьеса авторы. 2011 йылдың ғинуарынан - Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры директоры. Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы уҡытыусыһы. Ул 1971 йылдың 9 июнендә Ишембай ҡалаһында тыуған.

✓Башҡортостан Яҙыусылар союзы башланғысы буйынса үткәрелгән "Ҡыштың аҡ йыйы" тип аталған әҙәби-музыкаль байрам Әҙәбиәт йылында һуңғы сара булды. Сара барышында республикала мәҙәниәтте үҫтереүгә һәм әҙәби марафонды уҙғарыуға ҙур өлөш индергән яҙыусылар бүләкләнде. Яҙыусылар һәм шағирҙар Әмир Әминев, Марсель Сәлимов, Владимир Денисов, Гөлназ Ҡотоева, Светлана Ғәфүрова, Кристина Андриянова, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы Риф Әхмәҙиев Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе ҡулынан наградалар алды.

✓Литваның Вильнюс ҡалаһында "Tindirindis" XIII халыҡ-ара анимация фильмдары фестивалендә башҡорт режиссеры, аниматор Рим Шәрәфетдиновтың "Супер 8" тип аталған эше фестивалдең дипломына лайыҡ булды. Шул уҡ эш Санкт-Петербургта "Мультивидение" XIII анимация сәнғәте фестивалендә юғары баһаланды. Сарала бөтә донъянан иң яҡшы 1200-ҙән ашыу эш ҡабул ителгән.

✓Үтеп киткән йылдың һуңғы көндәрендә Өфө шоссеһы, 4 адресы буйынса урынлашҡан йорттоң авария хәлендә булыуы баш ҡаланың бар яуаплы хеҙмәттәрен көсөргәнештә тотто. Унда йәшәүсе халыҡ менән кисекмәстән фатирҙарҙан күсенергә кәрәклеге тураһында аңлатыу эштәре алып барылды. Яңы йыл алдынан был йортта йәшәүселәрҙең барыһы ла ваҡытлыса йәшәү урындарына күсерелде. Яҡын арала улар өсөн яңы күп фатирлы йорт төҙөү планлаштырыла.

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана реставрация эштәре бара. Ҙур залда тәҙрәләр алыштырылған, яҡтыртыу ҡорамалдары йүнәтелгән, иҙәнде һәм иҫке мебелде алыштырыу күҙаллана.

шле инфраструктура һәм бизнес объекттары төҙөү ҙә, төрлө, шул иҫәптән дәүләт милке менән идара итеүҙе лә индереп төҙөлгән концессиялар (муниципаль милек менән оҙайлы ваҡыт идара итеү шарттарында) булыуы ла мөмкин.

Концессия принцибы буйынса шәхси бизнес килешеү объекты менән идара итә, ағымдағы сығымдарҙы финанслай, яңы инвестициялар булдыра, хеҙмәт күрһәтеүҙән килем ала, шул уҡ ваҡытта муниципаль бюджетҡа түләүҙәр индерә. Коммерция хәүефе, ҡулланыу һәм хеҙмәтләндереү сығымдары шәхси бизнес елкәһенә ята, объекттар дәүләт йәки муниципаль милек булып ҡала. Килешеү ғәмәле иһә, ғәҙәттә, 15 - 30 йыл тәшкил итә.

"Госстрой" акционерҙар йәмғиәтенең Директорҙар советы рәйесе Кирилл Бадиков бизнес-йәмғиәттең муниципаль-шәхси партнерлыҡ проекттарында концессия шарттарында ҡатнашыуҙың миҫалы итеп Калинин районындағы Богдан Хмельницкий һәм Азатлыҡ урамдары менән сикләнгән территорияла граждандарҙың ял итеү урынын булдырыуҙы ҡарарға тәҡдим итә. Унда ял итеүселәрҙең һ.б. транспорт сараларын ҡуйыу урыны ла булырға тейеш. Һөҙөмтәлә ҡала транспорт ҡуя торған урыны булған төҙөкләндерелгән парклы була, шәхси бизнес сауҙа-сервис комплексын төҙөү мөмкинлеге ала.

## Минеке, беҙҙеке...

Бөгөн баш ҡалала барған ыңғай үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә ҡалаға ситтән инвестиция ағымы килә. Улар Өфөнөң үҫешенә аҡса һалырға әҙер. Ситтән килеүселәрҙә Тыуған ил, Тыуған ер тигән изге төшөнсәләр юҡ, шуға улар үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртып, халыҡтың тормошона йоғонто яһарҙай факторҙарға, мәҫәлән, экологияға кире тәьҫир итер, тигән фекер йәшәргә тейеш түгел, сөнки Рәсәй территорияһында ғәмәлдә булған законлар уның субъекттарында ла үтәлә. Шуға күрә ҡаланың производствоһына һәм сәнәғәтенә инвестиция һалған сит ил эшҡыуары ғына түгел, хатта үҙебеҙҙең инвесторҙар ҙа ғәмәлдәге ҡануниәтҡә, шул иҫәптән тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтенә лә буйһона, шулай уҡ экология буйынса федераль һәм республика-контроль-тикшереү органдары, төрлө экологик хәрәкәттәр, йәмәғәт ойошмалары ла хоҡуҡ боҙоуға юл ҡуймай. Яңы производстволы проектлау этабында уҡ инвесторҙарға РФ-ның Ҡала төҙөлөшө кодексында билдәләнгән шарттарға тап килгән рөхсәт алырға кәрәк. Проект документацияһына экспертиза үткәртеү өсөн эксперт ойошмаһына проект документацияһы менән бер рәттән ҡуҙалланған хужалыҡ эшмәкәрлегенең тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһо тураһында үткәрелгән йәмәғәт тыңлауҙарының һәм халыҡтың баһаһының протоколы ла тапшырылырға тейеш. Тыңлауҙар объект төҙөләсәк урындағы үҙидара территорияһында уҙғарыла һәм бында халыҡтың фекеренә лә ҡолаҡ һалына, халыҡ фекере лә иҫәпкә алына. Бындай йыйылыштарға теләгән һәр кем килә һәм инвесторҙарға үҙен борсоған һорауҙарҙы биреп, яуаптар ала ала. Бары тик дәүләт экологик экспертизаһының ыңғай һығымтаһы булғанда ғына инвестор объектты төҙөүгә тотона ала. Әммә артабан хужалыҡ эшмәкәрлеге алып барғанда ла һәр ойошма-предприятие Рәсәйҙә тәбиғәт ресурстарын файҙаланыуҙың төп экологик принциптарына: маҡсатына, түләүлелегенә, лицензия һәм лимитҡа тоғро ҡалырға бурыслы. Дөйөмләштереп әйткәндә, Рәсәйҙең хоҡуҡ киңлегендә эш алып барһаң икән, закон һәр кем өсөн бер.

## Рейтингыбыҙ тотороҡло

Өфө ҡала округы хакимиәте лә инвестициялар йәлеп итеү мәсьәләһенә етди иғтибар бүлә. 2011 йылда ошо йүнәлештә мэрияла яңы структуралар - инвестицион эшмәкәрлек буйынса сити-менеджерҙың урынбаҫары вазифаһы булдырылһа, һуңынан инде инвесторҙар, банктар һәм бағыусылар менән эшләү буйынса махсус бүлек ойошторолдо, Өфө ҡалаһының Инвестиция порталы эшләй. "S&P" рейтинг агентлығы критерийҙарына ярашлы, Өфөнөң рейтингы (BB-) "Тотороҡло" тип баһалана һәм был күрһәткес бер нисә йыл дауамында шулай ҡала. Бөгөнгө заманда донъяның финанс институттары халыҡ-ара рейтинг агентлыҡтарының күрһәткестәренә йүнәлеш тота. Сөнки уларҙың мәғлүмәттәре бойондороҡһоҙ һәм тап ошо баһалар һәм фараздар теге йәки был төбәктең инвестиция ылыҡтырыу ниғеҙенә һалына ла инде. Тимәк, рейтингы булмаған төбәктәрҙең инвесторҙар йәлеп итеү мөмкинлеге лә түбән. Әгәр 2014 йылда йәлеп ителгән инвестициялар күләме 105,6 миллиард һум тәшкил итһә, былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса был һан 110 миллиард һумдан ашып китте. 2015 йылда үткән ШОС һәм БРИКС дәүләттәре башлыҡтары саммиттары ла Өфөнө донъя кимәлендә танытыуға ярҙам итте һәм республика баш ҡалаһының эре инвестиция майҙаны икәнлеген раҫланы.

БДУ-ның патенттар бүлеге етәксеһе Гүзәл Шәнгәрәева килтергән мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда йәмғеһе ун ике белгес бар. Милли брендтарҙы теркәү өсөн тупланған документтар ҙа уларҙың ҡаты тикшереүен үтә. Докладсының тағы ла бер статистик мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәйҙә 154 тауарға халыҡ-ара патент бирелгән, шуларҙың ни бары дүртеһе беҙҙең республика бренды икән: "Башҡорт балы", "Бөрйән солоҡ балы", "Ҡорғаҙаҡ" һәм "Ассы" минераль һыуҙары. Шуға күрә, конференция барышында Гүзәл Шәнгәрәева республика брендтарын теркәү эшен тиҙләтергә кәңәш итте:

- Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының йөҙөн билдәләрлек рухи һәм матди байлығыбыҙ бихисап. Әлеге көндә Рәсәйҙәге башҡа милли республикалар араһында беҙ беренсе урында торһаҡ та (Удмурт республикаһында 3 бренд, Дағстан һәм Татарстан республикаларында 2 бренд), илдең башҡа төбәктәренән һиҙелерлек артта ҡалғанбыҙ. Башҡалар башҡорт халҡы менән уртаҡ булған берәй әйберҙе үҙенең милли бренды итеп теркәү үткәрһә, беҙ уны үҙебеҙҙеке тип иҫәпләй алмайбыҙ. Ырымбур мамыҡ шәле быға асыҡ миҫал. Әгәр ҙә беҙҙән алда берәй халыҡ тирмәгә таныҡлыҡ алып өлгөрһә, халыҡ-ара кимәлдә ул да башҡорт халҡының боронғо торлағы һаналмаясаҡ. Шуға күрә, заман талабынан артта ятып ҡалмаҡса, милли брендтарҙы теркәү эшен тиҙләтергә кәрәк. Әгәр ҙә "Можайское молоко" Рәсәйҙең милли бренды икән, ни өсөн башҡорт ҡымыҙы ла шундай статус алмаҡса тейеш? Милли брендтарҙы теркәү еңел эш түгел, әммә ҡағыҙ йыйыуҙан ҡурҡып, ситтә тороп ҡалмайыҡ, - тигән саҡырыу ташланы Гүзәл Сабир ҡыҙы.

Ҡумәкләгән - яу ҡайтарған, ти, бергәләп тотонһаҡ, халҡыбыҙҙың милли байлыҡтарын заман ҡушҡан "бренд" тигән һүҙ аҫтына йөшереп һаҡлап ҡалыу ҙа ҡыйынға төшмәҫ. Киләһе йылда башҡорт халҡының милли үҙенсәлеген, рухи байлығын тәшкил иткән аталар, әйберҙәр донъя кимәлендә тик Башҡортостандың йөҙөн кәүҙәләндереһен өсөн тырышлыҡ күрһәтәйек, милләттәштәр.

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.

*КҮҘАЛЛАУҘАР*

# ИҠТИСАДИ ХӘЛ КӨЙЛӘНЕРМЕ?

**Иҡтисадтың тотороҡлоғо бөтә дәүләттәрҙең дә үҫеш нигеҙе. Һуңғы йылдарҙа нефтҡә хаҡтың төшөүенә, көнбайыш тарафынан индерелгән санкцияларға Рәсәй иҡтисады әҙер булмай сыҡты. Был хәлдәрҙән нисек кенә ғорур сығырға тырышһаҡ та, реаль һандар һәм ил халҡының йәшәү кимәленең түбәнәйеүе иҡтисад өлкәһендәге ситуацияның ауыр булыуына ишаралай.**

Иҡтисади күрсәк, Эске тулайым продукт кимәленең (ВВП) төшөүе, хаҡтарҙың артыуы, ә эш хаҡының, киреһенсә, ҡыҫҡарылыуы йәки оҙайлы ваҡыт дауамында түләнмәүе бөтәбеҙҙе лә билбауҙы ҡыҫыбыраҡ бәйләргә мәжбүр итә. Шулай ҙа һәр кемдең күңелендә бына-бына иҡтисади мәсьәләләр хәл ителер һәм тормош яҡшырыр, тигән өмөт быҫҡый. Бөгөн күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙың береһе - 2016 йылда Рәсәй иҡтисады менән нимә булыр? Эксперттар фекеренә ҡуҙ һалайыҡ.

Тәү сиратта, ил етәкселегенең вәғәҙәләренә туҡталайыҡ. Иҡтисадты үҫтереү министрлығы башлығы Алексей Улюкаев оҙаҡламай нефтҡә хаҡтарҙың артыуына һәм ошо үҫеш тенденцияһы 2018 йылға тиклем дауам итеүенә ышана. Шуға күрә уҙған йылда 3 процентҡа төшкән Эске тулайым продукт алдағы йылда 2,3 процентҡа үҫәсәк, тип билдәләй ул. Быға Рәсәй капиталының сит илгә китеү процесы туҡтауы ла булышлыҡ итәсәк, тигән фекерҙә министр. Был һүҙҙәргә бигүк ышанып етмәҫкә лә мөмкин ине, ләкин Улюкаевтың ышанысын төрлө рейтинг агентлыҡтары аналитиктары ла, Рәсәй финанс министры Антон Силуанов та яҡлай. Улар күҙаллауынса, 2016 йылда Рәсәй иҡтисады әлегә тиклем юғалтҡан бөтә позицияларын да киренән ҡайтарасаҡ һәм илдең Эске тулайым продукты кимәле 1,9 процентҡа күтәреләсәк. Был осраҡта "Ауыҙҙарына бал да май", тип әйтергә генә ҡала.

Ләкин был оптимистик фекерҙәргә ҡаршы сығыусылар ҙа бар. Мәҫәлән, Халыҡ-ара валюта фонды Рәсәйҙең әлеге лә баяғы эске тулайым продукты кимәле тағы ла 1,1 процентҡа төшәсәк, ә инфляция 9,8 процентҡа етәсәк, тип көтә. Ә билдәле иҡтисадсы Алексей Кудрин был түбән тәгәрәү бер нисә йылға һуҙыласаҡ, тип тә өҫтәй.

Беҙҙәге хаҡтар доллар һәм евро курсына ныҡ бәйләнгән. Улар күтәрелдеме, аҙыҡ-түлеккә, тауарға, хеҙмәттәргә хаҡтар "елп" итеп өҫкә менеп тә китә. 2016 йылда долларҙың курсы 55 һумға, ә йылдың икенсе яртыһында иһә 53 һумдан да түбән төшәсәк, тип ышандыра беҙҙе ил хөкүмәте. Был һүҙҙәргә ышанырғамы, юҡмы, һәр кем үҙе хәл итә, ләкин эксперттар аҡсаларын долларҙа һаҡлаусыларға уларҙан ҡотолорға ашыҡмаҫҡа кәңәш итә.

Һумдың хәл торошона шулай уҡ Рәсәйгә ҡарата ҡулланылған санкциялар ҙа тәьҫир итә. Ағымдағы йылда ла был сара үҙ көсөн юғалтмаҫ кеүек, сөнки күптән түгел генә АҠШ үҙенең беҙҙең ил граждандарына һәм ойошмаларына ҡарата ҡабул ителгән санкциялар исемлеген тағы ла тулыландырҙы. Тимәк, һумдың хәле быйыл да артыҡ ауыраланмаясаҡ.

**Шулай итеп, күпме эксперт, шул тиклем фекер. Нисәмә белгес, шунсама прогноз. Шулай ҙа оптимистик рухты төшөрмәйек. Бөтә ауырлыҡтар ҙа үтә торған. Әлегә тиклем Рәсәй әллә күпме көрсөктәрҙе йырып үтергә үҙендә көс тә, ғәйрәт тә таба килде. Тимәк, прогноздарҙың ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, был иҡтисади көрсөктән дә алҡымынан алыр саралар табыласағына шикләнмәйек.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Быуын шешеүенән (артрит)

❖ 1 ҡалаҡ кипкән ромашканы 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 30 минут тоторға. Төнәтмәне көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алдан 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Шулай уҡ ошо уҡ төнәтмә менән ауыртҡан быуындарҙы ла һөртергә мөмкин.

❖ 1-әр ҡалаҡ гәрсис, бал, май бергә ҡушып болғанған дауаны компресс рәүешендә ҡулланырға.

❖ 1 йомортҡа һарыһын 1 балғалаҡ скипидар һәм 1 ҡалаҡ алма һеркәһе менән бергә ҡушып яҡшылап болғарға. Килеп сыҡҡан ҡушымтаны ауыртҡан быуындарға һөртергә.

## Ревматизм менән яфаланғанда

❖ 1 стакан көнбағыш майын ҡайнауға тиклем еткерергә, ләкин ҡайнатып сығармаҫҡа. Һыуынғандан һуң уға ваҡланған 30 грамм лавр япрағы өҫтәп 10 көн дауамында төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Һөҙөп алынған шыйыҡсаны ауыртҡан урындарға көнөнә 3-4 тапҡыр һөртергә.

## Псориаз

❖ 3 эре алоэ гөләнең япрағын иҙеп 250 мл араҡы йәки спирт ҡойорға. 3-4 көн йылы урында тотҡандан һуң сирле урындарға даими рәүештә һөртергә. Дауалау курсы оҙаҡ дауам итә.

## Тимрәү (лишай)

❖ 1 балғалаҡ валерьян дарыуына 1-әр балғалаҡ 5 процентлы йод һәм көнбағыш майы ҡушып тимрәү булған урындарға көнөнә 3 тапҡыр һөртергә. Дарыуҙы ҡараңғы урында һаҡлау фарыз.

## Ҡан баҫымы түбәнәйгәндә

❖ Көн һайын иртәнге сәйҙә ит турағыс аша үткәрелгән ҡара ҡарағат һыланған бер киҫәк арыш икмәге ашарға. Бутербродтың аҙағынан бер стакан һөт эсеп ҡуйыу мотлаҡ.

## Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ Көн һайын киске аш ваҡытында 1-әр ҡалаҡ бал ашау ярҙам итер.

***✓ Эскән кешенең ғүмер оҙайлығы 48-55 йыл. Уларҙың 25 проценты был йәшкә лә етмәй. 6-8 йыл систематик рәүештә эскелек менән булышҡан ата-әсәнән тыуған балалар аҡыл йәһәтенән бүтәндәрҙән кәм була.***

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ИЗГЕЛЕККӘ... шыҡырыҡла

**Башҡорттарҙа һайыҫҡан культы ҡарғаға бәйле дини-мифологик ҡараштарға оҡшаш. Ҡарға кеүек үк, һайыҫҡан да кеше яҙмыштарын, ваҡиғаларҙы алдан хәбәр итеүсе булып иҫәпләнә.**

Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһендә йәшәгән башҡорттар әйтеүенсә, һыйыҫҡан ҡапҡа башына ултырып шыҡырлаһа йәки ауыл тирәләй шыҡырлап өйрөлөп йөрөһә (Ырымбур өлкәһе, Балтас районы), ул ниндәйҙер хәбәр алып килгән.

Ышаныуҙарҙа һайыҫҡанға ҡараштар ыңғай, ул яҡшылыҡ, изгелек категориялары менән бәйле. Яҡын тирәлә һайыҫҡан ҡысҡыра икән, быны мотлаҡ яҡшыға юрай башҡорттар. "Һайыҫҡан шыҡырлай - ҡунаҡ көт" тиҙәр Хәйбулла районының үҫәргән башҡорттары. Ҡарағай-ҡыпсаҡ, ғәйнә, таҙлар, уран, танып, өпәй ырыуҙарында ла был ышаныу бар. Илекәймеңлеләр (Әлшәй районы) әйтеүенсә, һайыҫҡан ныҡ юғарынан ҡысҡырһа - ҡунаҡ йыраҡтан килер. Шыҡырлап, түбәндән осоп үтһә, яҡында йәшәгән кеше килер. Пермь крайы Барҙа районы ғәйнәләре шыҡырлаған һайыҫҡан ҡайһы яҡҡа ҡарай, ҡунаҡ шул яҡтан килер, ти.

Шул уҡ ваҡытта һайыҫҡан насар хәбәрҙәр килтереүе лә бар. Шуға ла һайыҫҡан шыҡырлағанда: "Изгелеккә булһын, кеше ҡулында йөрөтмәһен!" тиҙәр. Был ышаныу Белорет, Йылайыр, Хәйбулла райондарында, Ырымбур өлкәһендә, Пермь крайында таралған. Белорет районында йәшәгән инйәр-ҡатайҙар: "Изгегә шыҡырыҡла, изгегә шыҡырыҡла, ем һалам! Яманға шыҡырыҡлама - йәнеңде алам!" тип һамаҡлайҙар. Һайыҫҡанға мөрәжәғәттең башҡа варианттары ла осрай:

*"Изгелеккә шыҡырыҡла, изгелеккә*
*Изгелеккә шыҡырыҡлаһаң, ауыҙыңа - һары май.*
*Яманлыҡҡа шыҡырыҡлаһаң,*
*Яурыныңа - уҡ, ауыҙыңа - б...ҡ!"*

***(Бөрйән районы ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы).***

Йәки:
*"Изгегә булһын, изгегә!*
*Изгегә булһа - ауыҙыңа йылы б...ҡ,*
*Яуызлыҡҡа булһа - к...теңә уҡ!"*

***(Йылайыр районы түңгәүер ырыуы,***
***Хәйбулла районы үҫәргән ырыуы).***

Һайыҫҡанды һүҙ менән кәмһетергә тырышыу ҙа бар. Ул бигерәк тә балалар ижадындағы әбәкләүҙә сағыла:

*"Һайыҫҡан, һайыҫҡан,*
*Ике бото тайышҡан"*

***(Хәйбулла районы үҫәргән ырыуы).***

*"Шырыҡ-мырыҡ һайыҫҡан,*
*Тояҡтары ҡайышҡан"*

***(Ейәнсура районы үҫәргән ырыуы).***

*"Шыҡыр-шыҡыр һайыҫҡан,*
*Бүрәнәгә йәбешкән"*

***(Учалы районы ҡара-табын ырыуы).***

Бында һүҙ көсөнә ышаныу, йәғни насар ниәт менән килгән һайыҫҡанды һүҙ ярҙамында зарарһыҙландырыу ята.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ, ЭСМӘЙЕК!*

**Сираттағы хәбәр йөрәкте әрнетеп, уйға һалды. Иғлан ителмәгән "һуғыш" ҡорбандарының теүәл иҫәбе алып барылһа, моғайын, нығыраҡ тетрәнер инек. Эйе, күпме кешене үҙенең ҡоло итте был эскелек, күпме ғаилә уның менән алышып көн күрә. Ҡорбандар, күҙ йәштәре, йән яралары, күңел тетрәнеүҙәре - "сәхнә артында", йәғни ғаиләләр эсендә. Был иғлан ителмәгән һуғыш та, нигеҙҙә, ғаиләләр эсендә бара. Шуға уға артыҡ иғтибар иткән кеше лә юҡ һымаҡ. Был заман афәте күпме һыҙланыу, бәхетһеҙлек, емерелгән яҙмыштар сығанағы булып тора.**

# ҠОРБАНДАР АРТА...

## Ә бит шартлау ҙа юҡ, пулялар ҙа осмай



Әленән-әле йәп-йәш, донъя көтөр ир-егеттәрҙең, әсә бәхете кисереп кенә йәшәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың тап ошо "һуғыш" ҡорбаны булғанын ишетә йөрөйбөҙ. Уфтанабыҙ. Һәм.. шуның менән онотола был ваҡиға. Күп тә үтмәй, икенсеһе...

Инде законһыҙ рәүештә алкоголь һатыу менән булышҡан кешеләрҙең намыҫын һиҫкәндерер һүҙҙәр ҙә табып булмаҫ һымаҡ. Сөнки булмаған нәмә нисек һиҫкәнһен...

Был күренеш районыбыҙҙың барлыҡ ауылдарын да ялмап алған тиһәм, яңылышмам, моғайын. Хатта төпкөл ауылдары ла. Күптән түгел ишеткән бер ваҡиға, ирекһеҙҙән, барыбыҙға ла билдәле әкиәтте хәтерләтте. Ниндәй әкиәт икәнен үҙегеҙ самалаһығыҙ...

...Борон-борон заманда... Әй, юҡ, бөгөнгө, һинең менән мин йәшәгән заманда бер ханым йәшәгән. Ул бик бай һәм етеш йәшәргә теләгән. Ләкин юрғанын башына тартһа - аяғы, аяғына тартһа - башы асыла икән. Был бик оҙаҡ уйланған юрғанын нисек ҙурайтырға. Хәйер, юҡты һөйләйем, юрғаны ла ҡәҙимге беҙ ябынған һымаҡ булған, ашарына ла етерлек булған, ти. Ете көн, ете төн уйлағандан һуң, ниһайәт, тапҡан был ханым уйҙарына яуапты. Үҙ эшен асырға ҡара иткән. Сөнки, ана бит, район гәзитендә лә "Эшҡыуарлыҡ - заман талабы" тип яр һалалар. Һөҙөмтәһе иртәгә үк үҙен аҡларҙайына тотонорға ҡарар иткән был эшҡыуарлыҡтың. Тиле кеүек, мал ишәйтеп ятыр баш юҡ, уларға бесән әҙерләр кәрәк, аҫтын таҙартырға, ашатырға-эсерергә. Ә ул уйлаған шөғөл иң уңайлыһы - өйөңдән дә сығырға кәрәкмәй, клиенттар үҙҙәре генә килеп баш һаласаҡ. Был өлгөр, сос ҡатын эш тә башлаған. Бызмырҙап, фләгәләр мейес башына ҡунаҡлай торған, ханымдың кеҫәһенә аҡсалар тама торған. Ауылда йүнле аҡса эшләрҙәй урын юҡ, ә эсергә теләүселәр быуа быуырлыҡ. Яҙҙырып һорап наҫырын ҡорота башлайҙар. Бахыр ханым йәнә уйға батҡан. Тапҡан йәнә юлын. Аҡсаһыҙ килеүселәр уның бойороҡтарына өнһөҙ күнә. Шуға ҡатын да хаттин аша башлаған. Сөнки хәмер ҡолдары уның күҙенә генә ҡарап тора, нимә теләй, шуны килтерә икән. Хатта балаларының ауыҙынан өҙөргә лә әҙерҙәр. Шуға ханым үҙен теге әкиәттәге ярыҡ ялғаш эргәһендәге ҡатындай тоя башлаған, нәфсеһе арта ғына барған. Берҙән-бер көн был сираттағы бер ауылдашына, миңә кәрәҙле бал кәрәк, тип бойорған. Нишләһен, баш сәңкеп ауырта, киткән был кәрәҙле бал эҙләп. Тапҡан, ти. Әллә ней алыҫ та йөрөп тормаған, күршеләге умарталыҡтан бәскән. Шөкөр, умарталыҡтар бикләнмәй, әйҙә, теләгәнсә урла ғына. Хәйер, бал ҡортоноң тиген бөжәк түгел икәне генә башына инеп сыҡмаған уҙамандың, уның хаҡында Ҡөрьәндә махсус сүрә лә бар. Ололар ҙа бал урлаған кеше бер ҡаза күрә, тиер булған. Тик теге ханымдың бойороғо ҡолағында сыңлап торғас, былар хаҡында уйланырға әмәле лә булмағандыр инде, меҫкендең. Кәрәҙҙе ҡуйынына тыҡҡан да йүгергән... Тик ауылдаштары уның кәүҙәһен әлеге өйгә яҡын ғына ерҙәге тыҡырыҡта табып ала... Үлем сәбәбе нимәлә: бахмурмы, әллә бал ҡорто сағып, аллергия булғанмы, әллә Хоҙай язаһымы? Һорауҙар яуапһыҙ. Мәлһеҙ өҙөлгән кеше ғүмере генә ҡыҙғаныс... Кәрәҙле балһыҙ ҡалған ханымдың да эсе бошҡандыр. Юҡ, кеше үлеменә сәбәпсе булғанға түгел, балһыҙ ҡалғанға... Их, әкиәт кенә булһа икән дә бит, хәҡиҡәт шул был. Әлегә был замана әкиәте тамамланмаған, сөнки ханым ярыҡ ялғаш эсендә түгел әлегә. Тик был донъя менән генә эш бөтмәй, тегенеһе лә бар бит әле... Бер осраҡҡа ғына ишара булһа ла, бындай хәлдәр һәр ауылда тиерлек бар шул, ҡыҙғаныс ҡаршы.

Ғөмүмән, ҡырҙан килтерелеп, итәк аҫтарынан һатылған шикле араҡылар, өйҙә етештерелгән көмөшкәләр, магазиндарҙың прилавкалары аҫтынан һатылғаны күпме кеше ғүмерҙәрен алып китә, күпмеһен ғәрип яһай. Шуларҙан килем алған кешеләрҙе тетрәтмәйме икән улар? Был күҙ йәштәре һеңгән аҡсалар нисек тамаҡтарына аш булып бара икән? Аҡса эшләүҙең бүтән юлдары бөтмәгән бит. Эшлә генә. Бөгөн ауылдарҙа эшкә яраҡлы халыҡтың яртыһы эшһеҙ, ә мал көтөүсеһе таба алмайҙар.

Әйткәндәй, алкоголь һатыу менән осон-осҡа ялғай алмағандар түгел, етеш йәшәгәндәр булыша. Тегеләрен, тырышҡанда, нисек тә аҡлап та булыр ине, ярай, балалары астыр, тип, ә быларының ҡылығын нисек аңлатырға?

Бөтә донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөгөн донъя менән хушлашыусы һәр өсөнсө кешенең үлем сәбәбе - эскелек. Эскән кешенең ғүмер оҙайлығы 48-55 йыл. Уларҙың 25 проценты был йәшкә лә етмәй. 6-8 йыл систематик рәүештә эскелек менән булышҡан ата-әсәнән тыуған балалар аҡыл йәһәтенән бүтәндәрҙән кәм була. Һыра эсеү ҡатын-ҡыҙҙарҙа күкрәк яман шеше ихтималлығын 40 процентҡа арттыра.

Күп ауыр енәйәттәр тап эскән килеш башҡарыла. Алкоголь ирҙәрҙә - ҡатын-ҡыҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙа ир-ат һыҙаттары барлыҡҡа килтерә.

...Эскелек хаҡында яҙыуҙың стенаға борсаҡ бәргән һымаҡ булыры билдәле. Шулай ҙа йәп-йәш кешеләрҙең тамаҡтарын тыя алмаған өсөн генә донъя менән ваҡытынан алда бәхилләшеүе аяныс. Ишеткән һайын күңел тетрәнә... Ә иғлан ителмәгән "һуғыш" дауам итә, ҡорбандар арта, дошман бик мәкерле, аҫтыртын һөжүм итә... Украиналағы һуғыш хаҡында яҙабыҙ, телевидениенан күрһәтәләр, радионан һөйләйҙәр, ә үҙебеҙҙең арала барған "һуғыш" хаҡында ләммимбеҙ. Шартлауҙар ҙа ишетелмәй, шөкөр, пулялар ҙа осмай, ләкин ҡорбандар арта ғына бара. Аҫтыртын дошман күпкә ҡурҡыныс шул...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**

*ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!*



# ФӘЙЗУЛЛА АҠТАЕВ ҺӘМ ЮЛБАРЫҪ БИКБУЛАТОВ

## Башҡорт полктарының арҙаҡлы командирҙары

**1812 йылғы Ватан һуғышы шул йылда ғына тамамланмаған. 1813-1814 йылдарҙа ла Рәсәй ғәскәрҙәренең Көнбайыш Европаны азат итеү һәм Наполеон режимын бөтөрөү маҡсатында ойошторолған сит ил походтары дауам итә. Ошо хәрби хәрәкәттәрҙә һәм походтарҙа башҡорт халҡының 22 полкы ҡатнаша. 1813-1814 йылғы сит ил походында рус армияһы союздаш Англия, Пруссия, Швеция ғәскәрҙәре менән берлектә Европанан Наполеон армияһын ҡыуа һәм 1814 йылдың 19 (31) мартында Парижға бәреп инә. Улар араһында 9 башҡорт полкы, шул иҫәптән 1812 йылдың сентябрендә хәҙерге Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы һәм Белорет районларын үҙ эсенә алған 6-сы Башҡорт кантонында төҙөлгән 14-се, 3-сө һәм 15-се Башҡорт полктары ла була. 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла Сурағолов хаҡында гәзитебеҙҙең былтырғы 40-сы һанында яҙып сыҡҡайныҡ инде.**

Күренекле тарихсы-ғалим, профессор Ә. З. Әсфәндийәров Фәйзулла Аҡтаевтың 6-сы башҡорт кантоны Бөрйән улысының Фәйзулла ауылынан булыуын һәм 3-сө Башҡорт полкы командиры икәнлеген иҫбатлай. Әммә уның тикшереүҙәрендә батырҙың исеменә ҡағылышлы буталыш инеп китә. Аҡтаев шәхесе унда ике кеше булараҡ күрһәтелә. Уларҙың береһе Бөрйән улысы Фәйзулла ауылын нигеҙләүсе хорунжий Фәйзулла Ильясов, икенсеһе 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы есаул Фәйзулла Әликан улы Аҡтаев. Документтарҙы өйрәнә торғас, беҙ бының сәбәбен асыҡланыҡ. Баҡтиһәң, бер үк кеше бер документта Фәйзулла Ильясов Төкәй улы, ә икенсеһендә Фәйзулла Ильясов Аҡтай улы тип бирелә икән. Бынан тыш, "1839 йылғы 6-сы кантон чиновниктары һәм урядниктарының хеҙмәте тураһындағы формуляр теҙмә"лә Аҡтаевтың атаһының исемендә хата китә. Ошонан алып яңы исем төрлө ерҙә төрлө үҙгәрештәр ала барып, башҡа документтарға күсә. 1859 йылғы ревизия әкиәттәренең "4-се Башҡорт кантоны 10-сы тирмә Фәйзулла ауылы"нда Фәйзулла Әлекәнев Аҡтаев бар. Ул 72 йәштәге отставной есаул тиелә. Ҡатыны Сәлимә Вәлитова 42 йәштә, ҡыҙҙары Ҡунаҡбикә - 14, Ғәйнихаят - 12 йәштә. Бына ни өсөн ул Ә. Әсфәндийәровта "есаул Фәйзулла Әликән улы Аҡтаев" булып китә.

Был ике исемдең бер шәхес икәнлеген иҫбатлаусы башҡа мәғлүмәттәрҙе лә ҡарап үтәйек. 6-сы башҡорт кантоны Бөрйән улысы Кинйәбулат ауылы буйынса 1816 йылғы ревизия әкиәттәрендә лә 1812 йылда бында 1787 йылда тыуған Фәйзулла Ильясов Төкәй улы йәшәүе хаҡында әйтелә. Бер ихатала йәшәүселәр күрһәтелә: Күскилде Төкәев, 56 йәш, уның ағаһы Ильяс Төкәев, 54 йәш, Ильястың улы Фәйзулла, поход есаулы, 24 йәштә. Күрһәтелгәндәрҙең йәштәре икенсе ауылға күсенеүҙәре сәбәпле, VI ревизия (1811 й.) буйынса бирелә. Был турала "Күскилде, Ильяс һәм Йәнебәк Төкәевтар 1812 йылда ошо уҡ улыстың Ғәбит Мансуров старшиналығындағы Бәхтегәрәй ауылына күсенделәр", тип теркәп ҡуйыла. Башҡа документтарҙа ла Фәйзулла Ильясов 1812 йылдан Бәхтегәрәй (Мансур) ауылында йәшәй. 1834 йылда Фәйзулла Ильясов Аҡтай улы Фәйзулла ауылын нигеҙләй, унда 73 кеше күсеп бара. Ауылды тап ошо шәхес нигеҙләүе тураһында ла дәлилдәр бар. Был документтарҙа ир енесендәге ауыл халҡы йәштәре менән теҙеп яҙылған. Икенсе һан аҫтында кантон ярҙамсыһы, хорунжий Фәйзулла Ильясов теркәлә, VIII ревизия буйынса уға 47 йәш, улы Йыһангиргә - 7, тимәк, ул 1827 йылғы. Һәм ошо документ аҫтына "Кантон ярҙамсыһы хорунжий Аҡтаев" тип ҡул ҡуйылыуы бик мөһим. Аңлауығыҙса, 1834 йылға Фәйзулла Ильясов Төкәй улы Аҡтаев фамилияһын йөрөтә башлай.

Тағы ла бер документ үрҙә әйтелгәндәрҙе дәлилләй. Был - "1839 йылғы Формуляр список". Унда "хорунжий Фәйзулла Ильясов Аҡтай улы, 53 йәштә, Фәйзулла ауылында йәшәй", тиелә. Ҡатыны һәм балаларының исемдәре лә тура килә: ҡатыны - Сәлимә, улдары Йыһангир һәм Ғәли, ҡыҙҙары Мәхүбъямал, Өммөгөлсөм.

Шулай итеп, төрлө документтар нигеҙендә беҙ есаул Фәйзулла Ильясов менән хорунжий Фәйзулла Аҡтаевтың бер үк кеше булыуын иҫбатланыҡ.

Ни өсөн Фәйзулла Ильясов фамилияһын Аҡтаев тип үҙгәртеүен әйтеп булмай. Әммә XVIII быуатта бөрйән башҡорттарының Аҡтай исемле ауылы һәм шул фамилияны йөрөткән тархандары булыуы хаҡында билдәле. Яңы фамилияның барлыҡҡа килеүенә шул заманда башҡорт элитаһында өс бүлекле исем-атҡа (исем, атаһының исеме, фамилия) күсеү сәбәпсе булырға ла мөмкин.

Артабан Фәйзулла Аҡтаевтың хеҙмәт юлын өйрәндек. Хеҙмәтен 1806 йылдың беренсе апреленән казак булараҡ башлай. 1813 йылдың 13 ноябрендә зауряд-хорунжий чинын ала, 1815 йылдың 13 февраленән - есаул, 1816 йылдың 27 майынан дистанция начальнигы, 1827 йылдың 5 ғинуарынан йортауай старшина, 1828 йылдың 2 апреленән полк харунжийы чинына үрләтелә. 1832 йылдың 22 ноябрендә иһә 6-сы кантон начальнигы ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. 1812 йылдан 1815 йылғаса француз кампанияһы ваҡытында 3-сө Башҡорт полкы составындағы запас армияла була. Линия хеҙмәтендә 1806, 1807 һәм 1822 йылдарҙа - Ҡыҙыл, 1808 һәм 1815 йылдарҙа - Уртазым, 1818 Магнит ҡәлғәләрен һаҡлауҙа тора. 1835 йылда Ҡаҙаҡ далаһындағы эскадрон составында була. 1830 йылдың 26 ноябрендә Корпустың 71-се бойороғо буйынса дезертирҙы тотҡаны өсөн рәхмәт хаты ала. Белемле була. Русса яҙа һәм уҡый белә. Фәйзулла Аҡтаевты полк хорунжийы итеп күтәреү хаҡында документтар бар. Был чин уға Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе дворянины тигән статус бирә. Фәйзулла Аҡтаевтың үлгән ваҡыты һәм урыны тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Яҡынса 1859 йылдан һуң тип иҫәпләргә мөмкин. Балалары уның юлын намыҫлы дауам итә. X ревизия яҙмалары буйынса, оло улы Йыһангир Аҡтаев полк зауряд-сотнигы, кантон ярҙамсыһы, 32 йәштә. Ҡатындары: Тутыйғош Ҡотлоғәлләмова һәм Сафура Ҡаһарманова. Тағы ла ике улы: Мөхәмәтғәли 19, Әхмәтғәли 17 йәштә. Мөхәмәтғәленең ҡатыны Хәбибъямал Фәизова, ҡыҙҙары Ғәйшә. Шулай итеп, Аҡтаевтар бөгөнгө Баймаҡ районы Таналыҡ ауылына нигеҙ һалыусылар була.

Артабан Юлбарыҫ Бикбулатовтың биографияһына күсәйек. Уның 15-се Башҡорт полкы командиры булыуы хаҡындағы мәғлүмәт тә Ә. З. Әсфәндийәров тарафынан табыла. Ул былай тип яҙа: 1811 йылдың майында 6-сы башҡорт кантоны дистанция начальнигы Юлбарыҫ Бикбулатов армия походына әҙерләнеүсе биш йөҙлөк полк менән етәкселек итә; Ватан һуғышы йылдарында 15-се Башҡорт полкы командиры була; 1812-1814 йылдарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике көмөш миҙалға лайыҡ була; 1820 йылда Себергә ебәрелә. Артабан авторҙың баҫмаларында Бикбулатовтың 14-се полк командиры итеп күрһәтелеүен техник хата тип иҫәпләргә кәрәктер.

1820 йылдың 25 февралендә 6-сы башҡорт кантонлығы начальнигы А. Биктимеров тарафынан ойошторолған халыҡтан закөнһыҙ аҡса йыйыуҙа ҡатнашҡаны өсөн 14-се полктың мең башы һәм чиновнигы Юлбарыҫ Бикбулатовтың Себергә оҙатылыуы хаҡында билдәле башҡорт этнографы, профессор Р. З. Йәнғужин да яҙа. Әммә быға тиклем әлегә бер ерҙә лә Ю. Бикбулатовтың сығышы ҡайҙан булыуы билдәле түгел ине. Беҙҙең Ватан һуғышы яугирҙары документтарында ҡаҙыныуҙар ҙа фәтүә бирмәне. Ахырҙа, беҙ ревизия материалдарын тикшереүгә тотондоҡ. Геройҙың улысын да, ауылын да белмәйенсә, әллә күпме документтарҙы ҡарап сығырға тура килде. Ниһайәт, VIII ревизия (1834) материалдарында дистанция начальнигы һәм 14-се класс чиновнигы Юлбарыҫ Бикбулатов Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе Ҡатай улысы 14-се тирмә Рысаҡай ауылында (хәҙерге Белорет районы) йәшәй тиелә. VII ревизия (1816) документтары буйынса, ул 1766 йылда тыуа. Ҡатыны Гөлбәзиргә 51 йәш. Уларҙың биш улы була: Йәрмөхәмәт (1833 йылда үлә), Баймөхәмәт (1834 йылда үлә), Ҡаһарман 26 йәштә, Ширғәзе 16 йәштә, Бирғәле 12 йәштә һәм 16 йәшлек ҡыҙҙары Ҡарабикә. Ҡаһармандың ҡатыны Хәмиҙә, ҡыҙы Мәлиха була. Оло улы 27 йәшлек Ҡужахмәт Юлбарыҫов айырым йорт булып йәшәй.

Ю. Бикбулатовтың еңел булмаған яҙмышы хаҡында ревизия әкиәттәре лә "1820 йылда Себергә оҙатылған" ти. Ә. З. Әсфәндийәров әйтеүенсә, Юлбарыҫ Себергә китеп барған юлда ҡасып китә ала. Уның хаҡында башҡа мәғлүмәттәр юҡ. Уның балалары, ревизия мәғлүмәттәре буйынса, тыуған ауылдарында нигеҙ тотоп йәшәй һәм аталарының фамилияһын дауам итә.

Шулай итеп, тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 15-се Башҡорт полкы командиры Юлбарыҫ Бикбулатов ҡатай ырыуы башҡорто була. Уның шәжәрәһе бына ошолай: Бикбулат (?) - Юлбарыҫ (1766 й.т.) - Ҡужахмәт (1807) - Ҡаһарман (1808) - Ширғәзе (1818) - Бирғәле (1822). Ҡужахмәт Юлбарыҫовтан Шәрәфетдин тыуған (1831), Ҡаһарман Юлбарыҫовтан Шамабал (1851), Йәмлиха (1854), Шамсолтан (1856) тыуған. Ширғәзе Юлбарыҫовтың улы Сәйетғәле (1854). Бирғәле Юлбарыҫовтыҡы Сәхәүетдин (1842) һәм Баһаүетдин (1854).

Тәҡдим ителгән материалдар Башҡорт полктары командирҙары Фәйзулла Аҡтаев һәм Юлбарыҫ Бикбулатовтың бөгөнгө быуындарына ата-олатайҙарының данлы тарихын өйрәнергә һәм шәжәрәһен тулылындырырға ярҙам итер, моғайын.

**Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ғәҙеллеккә тоғро ҡалып, Уралда баҡыр һәм тимер заводтары булыуы, шулай уҡ мәғдәнселеккә яраҡлы урындар табылыуының башлыса башҡорттар менән бәйле икәне хаҡында әйтеп үтергә кәрәк.

Көҫәпҡол ауылында ошондай ике мәғдән эҙләүсе башҡорт беҙгә килеп, алтын тауҙары вәғәҙә итте. Әммә беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙең ҡышлауҙа башҡорттарҙың вәғәҙәләренә алдана инек; беҙ бесәй алтыны тип йөрөткән, күҙҙәренә ялтырап күренгәнде лә улар ысын алтын-көмөш, тип ҡабул итә. Шулай ҙа, бер нәмәне лә хурлама, тигәнде иҫкә алып, башҡорттар менән алтын тауына киттек. Ул Ағиҙел ярынан ғибәрәт икән, әле аталған ауылдан 5 саҡырымда булып, Ҡыҙылъяр тип йөрөтөлә. Башҡорттар беҙгә бер ниндәй ҡоралһыҙ үҙҙәренең алтынын күп итеп ҡаҙып ташланы, ә ул аҡ колчедан булып сыҡты...

Ағиҙел йылғаһы ярын ҡалдырып, Сәйтәк тип исемләнгән башҡорт ауылына йүнәлдек.Беҙ бында ҙур булмаған Болаҡ йылғасығы буйына йәйләүгә сыҡҡан башҡорттарҙы осраттыҡ. Көнитмештәре үҙгәргәнлектән, беҙгә уларҙың мөнәсәбәттәре үтә шәп булыр кеүек тойолғайны. Йәйләүҙә үҙҙәре эскән ҡымыҙ тәьҫиренән улар етди һәм һөйләшеп бармаҫ хәләткә инде, һәм үҙебеҙҙең юлыбыҙ өсөн кәрәкле нәмәләрҙе алыр өсөн беҙ үтә яғымлы булырға мәжбүр булдыҡ. Әммә яғымлы мөнәсәбәтебеҙ беҙгә терәк булманы, тик ҡаты киҫәтеү, ҡысҡырыныу ҡулланырға мәжбүр булыуыбыҙ менән телгән нәмәләребеҙҙе тиҙ арала алыуға өлгәштек: оло юлдарҙан алыҫ йәшәүсе башҡорттар юлаусылар тураһында яңылыш фекерҙә булып, үҙҙәре менән уҫал тотҡандарҙы ғына ысын һәм хаҡлы рәүештә юл йөрөүселәр, тип иҫәпләй. Беҙҙең юл күрһәтмәһе ҡағыҙы уларҙың шаулашыуын арттырып ебәрҙе, сөнки уның татарса тәржемәһе булһа ла, төйөндәре юҡ ине: бында уҡый белеүселәр һирәк булғас, юл күрһәтмәһендә кем нисә ылау бирергә тейеш, шунса төйөнө булған бау һүрәтләнә; ошо төйөндәр башҡорттарҙа губернатор йәиһә воевода ҡағыҙҙарынан да мөһимерәк, тип һанала.

Ошо ауылдан 30 саҡырымдар тирәһе ситтәрәк Төйбәмәш йылғаһына ҡойоусы шәп ағымлы Берғамыт йылғасығы буйында Хазина исемле башҡорт ауылы бар. Ул ошо ауылды уратып алған Тирмән Тау һыртындағы ҡарап танышыуға лайыҡ мәмерйәһе менән билдәле. Ошо ауылға беҙ төштән аҙаҡ барып еттек һәм йәйләүгә күсеп өлгөрмәгән башҡорттарҙы осраттыҡ; уларҙы мәмерйәгә юл күрһәтеүгә ауырлыҡ менән күндерә алдыҡ: улар миңә билдәһеҙ сәбәптән мәмерйә ҡарауҙы ниндәйҙер мөһим ғәмәлгә һанап, быны үҙҙәренең теңкәһенә тейерлек эш булыр, тип хәүефләнде. Ошо саҡта линия хеҙмәтендә йыш булып, ярайһы уҡ урыҫлашҡан йөҙ башы (сотник) әлеге башҡорт ауылында ине, һәм ул беренсе булып беҙҙе оҙата барырға ризалыҡ бирҙе; уның артынан башҡалар ҙа эйәрҙе. Шулай итеп, беҙ уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған башҡорттар менән, һөжүмгә барғандағылай, мәмерйәгә табан ҡуҙғалдыҡ.

**(Дауамы бар).**

*✓ 2013 йылда барлыҡҡа килгән "Заман" этно-проекты әлеге ваҡытта Мәскәүҙә республиканы кәүҙәләндереүсе ижади коллектив. Беҙҙең маҡсат - башҡорт моңон бөтөн Рәсәйҙә, сит илдәрҙә, икенсе ҡитғаларҙа ишеттереү.*



# МИЛЛӘТ ТУРАҺЫНДА

## милли моң да

**Тормошто сәнғәтһеҙ күҙ алдына килтереп булмай. Ул һәр кемдең күңелендә, булмышында, тәбиғәтендә. Моңға шатлыҡ-ҡыуаныс та, ҡайғы-хәсрәт тә, ынтылыш та, хыял да, өмөт тә, ҡәнәғәтһеҙлек тә, ғөмүмән, барлыҡ тойғолар ҙа һыя. Хәҙерге заман музыкаһы үҙ эсенә төрлө стиль һәм йүнәлеште алыуы менән ота. Был күптөрлөлөк араһында һәр кем үҙенең күңеленә хуш килгән моңдо таба ала. Бөгөнгө "Диалог" рубрикаһы ҡунаҡтары - "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө һәм "Заман" этно-проекты үҙ тамашасыларына боронғоноң һәм хәҙерге замандың бәйләнешен, башҡорт ауыҙ-тел ижадының яңыса яңғырашын, милли моңға таянып ижад ителгән автор йырҙарын тәҡдим итеүсе ижадсылар. Һүҙ төркөм етәкселәре Ринат РАМАҘАНОВ менән Радмир МУФТАХИНға.**

**▸ Һәр башланғыс ниндәйҙер идеяға нигеҙләнә. "Арғымаҡ" менән "Заман"дың нигеҙендә ниндәй йүнәлеш-идея ята?**

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында популяр булған "Каруанһарай", "Дәрүиш", "Аҡйондоҙ" һәм башҡа ошондай төркөмдәрҙән һуң башҡорт эстрада сәнғәтендә тынлыҡ урынлашты. Үҙ яйына, һалмаҡ ҡына аҡҡан сәхнә тормошон 2000-се йылдарҙа Роберт Юлдашевтың, "Бүреләр" төркөмөнөң ижады әүҙемләштерҙе, яңы офоҡҡа сығарҙы. Башҡорт музыка сәнғәте өлкәһендә әлегәсә булмаған ижади ҡараш, уны тамашасыға еткереү юлы һәм башҡаларға оҡшамаған, үҙенсәлекле башҡарыу алымы уларҙы тамашасы араһында танылулы итте. Башҡорт сәнғәтенә ошондай рухи яңылыҡ индереүселәр араһында беҙҙең "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө лә булды.

Төркөмдөң төп концепцияһы - башҡорт халыҡ йырҙарын, ҡобайырҙарын һәм башҡа аҫыл мәҙәни мираҫыбыҙҙы оло быуын кешеләренең генә түгел, ә йәш быуындың да "ишетеүенә", ҡабул итеүенә өлгәшеү. Һәр замандың да үҙенә генә хас һүҙҙәре, һөйләше, яҙыуы була. Бынан бер нисә быуат элек йәшәгәндәрҙең телмәрен аңлауы беҙгә ни тиклем ауыр булған кеүек, уларға ла төрлө яңы һүҙҙәр менән байытылған бөгөнгө көн һөйләше ят тойоласаҡ. Бигерәк тә йәштәргә аңлайышлы булһын өсөн уларҙың "тулҡынында" йөҙөү мөһим. Музыкала ла ошо уҡ ҡағиҙә эшләй, йәғни замана йәштәренең күңеленә элекке кеүек оҙон көйҙәр һуҙып ҡына барып етеп булмай. Шуға күрә традицион мәҙәниәтебеҙҙе төрлө музыка уйын ҡоралдары, хәҙерге заман стилдәре менән "биҙәп", яҡтыртыу һәм видеоҡоролмалар ҡулланып, заманса, әммә милли сәхнә кейемдәре менән байытып, этно-рок йүнәлешендәге ижадыбыҙҙы тамашасы хөкөмөнә сығарабыҙ. Башҡорт халыҡ моңон заманса башҡарыуҙан ғына ул халыҡтыҡы булыуҙан туҡтамай, шул уҡ ваҡытта уны күберәк аудиторияға ишеттерергә мөмкинлек бирә. Беҙҙең заманса эшләнгән аранжировкаларыбыҙ, үҙгәртеүҙәребеҙ тик "гарнир" ғына, ә төп "аҙыҡ" - беҙҙең быуаттан-быуатҡа күсеп килгән боронғо халыҡ ижады. Шуны һаҡлау һәм киләсәк быуынға түкмәй-сәсмәй еткереү төп маҡсатыбыҙ булып тора.

**Радмир МУФТАХИН:** "Арғымаҡ"тың формалашыуы, үҫеүе, ижади яҡтан нығыныуы, халыҡ араһында киң популярлыҡ яулауы минең күҙ алдымда булды. Төркөмдөң ижадҡа ҡарата оло яуаплылығын, башҡорт халыҡ моңкөйөнә һаҡсыл мөнәсәбәтен, һәр бер йырға, ҡобайырға хазина итеп ҡарауын күреп йөрөнөм. Тамашасының уларҙың һәр сығышын көтөп алыуын һәм йылы ҡабул итеүен күреп, халыҡтың башҡорт моңона таянған, әммә яңы, заманса стилдәге ижадҡа һыуһауын аңланым.

Республикала йәшәүсе милләттәштәрем туған телендә иркен һөйләшеү, үҙ моңона булған ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндереү мөмкинлегенә эйә. Башҡортостандан ситтәгеләргә иһә бөтә халыҡтарҙың мәҙәниәтенән бергә тупланған музыкаль "коктейль" менән генә хушһынырға тура килә. Ошо хәҡиҡәтте үҙем Мәскәүгә барғас ҡына аңланым һәм башҡорт моңо менән һуғарылған, заманса, ваҡыт менән бергә атлаусы төркөм ойошторҙом. 2013 йылда барлыҡҡа килгән "Заман" этно-проекты әлеге ваҡытта Мәскәүҙә республиканы кәүҙәләндереүсе ижади коллектив. Беҙҙең маҡсат - башҡорт моңон бөтөн Рәсәйҙә, сит илдәрҙә, икенсе ҡитғаларҙа ишеттереү, уны популярлаштырыу.

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Тамашасы беҙҙе тәүҙә төрлөсә ҡабул итте - кемдер асыҡтан-асыҡ көлдө, икенселәр аптыраулы ҡараш ташланы, өсөнсөләр "Ниһайәт, замана менән бергә атлаған, халҡыбыҙҙы сит тарафтарҙа ла лайыҡлы күрһәтерлек төркөм барлыҡҡа килде", тип һоҡланды. Бигерәк тә башҡорт халыҡ йырҙарын традицион башҡарыусыларҙың беҙгә ҡарата мөнәсәбәте, фекерҙәре ике яҡлы булды. Беҙҙе башҡорт халыҡ йырҙарын, ҡобайырҙарын боҙоуҙа, уларҙың йәмен ебәреүҙә ғәйепләүселәр ҙә табылды. Ләкин беҙ бер кемгә ҡарамайынса, үҙебеҙҙең юлдан барыуҙы дауам иттек. Һәм дөрөҫ эшләгәнбеҙҙер, тип ышанам.

**▸ Донъя йәмәғәтселеге аңында теге йәки был халыҡ тураһында фекер туплауҙа милли мәҙәниәт, ижад, сәнғәт ҙур роль уйнай икәнен беләбеҙ. Ошондай күҙаллауҙарға үҙ өлөшөгөҙҙө индерәһегеҙ булып сыға бит инде...**

**Радмир МУФТАХИН:** Бөгөн өйҙә ултырып ҡына донъяның теләгән нөктәһенә "барырға", күңелебеҙгә яҡҡан төрлө стилдәге һәм йүнәлештәге музыканы тыңларға мөмкинбеҙ. Ләкин һәр кемгә үҙенең милли моңо, туған телендә яңғыраған йыр-көйҙәре, халҡының асылын сағылдырыусы бейеүҙәре яҡын. Улар тик күңел асыу сараһы ғына түгел, ә тотош бер халыҡтың тарихын, йолаларын, көнкүрешен, уйхистәрен сағылдырыусы, киләсәк быуынға ниндәйҙер ҡомартҡы тапшырыусы сығанаҡ. Милли моң - ул халыҡ тауышы. Һәр халыҡтың да милли моңо тотош донъя йәмәғәтселеге аңында шул милләт тураһында фекер туплауға булышлыҡ итеүе менән әһәмиәтле. Шуға күрә ижадын үҙ халҡына ғына түгел, ә башҡа милләттәргә лә еткерергә, уларға танылулы, аңлайышлы итергә маҡсат ҡуйған ижади коллектив иңендә оло бурыс ята. "Заман" этно-проекты башҡорт моңон сит илдәрҙә, икенсе ҡитғаларҙа ла яңғыратыу, уны популярлаштырыу буйынса уңышлы эшләй. 2014 йылда Ҡаҙанда уҙған "Turkvizion - 2014" халыҡ-ара йыр конкурсында 3-сө, ә яңыраҡ Италияның Удинэ ҡалаһында булып үткән "Suns Europe - 2015" халыҡ-ара фестивалдә 2-се урын яуланыҡ. Тәүгеһендә төрки телле халыҡтар араһында Башҡортостан, ә икенсеһендә бөтә донъя алдында Рәсәй исеменән сығыш яһаныҡ. Ошондай мәртәбәле бәйгеләрҙәге сығышыбыҙ аша халҡыбыҙҙың ижади байлығын ишеттерә һәм башҡорт милләте тураһында ыңғай фекер туплауға булышлыҡ итә алыуыбыҙ менән ғорурланабыҙ.

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Был, һис шикһеҙ, шулай. Беҙ йыр-моңобоҙ, ижадыбыҙ аша үҙебеҙҙе башҡа халыҡтарға күрһәтәбеҙ. Ижад - матди булмаған ҡомартҡы. Уны тотоп ҡарап булмай, ләкин нәҡ ул быуындар араһында ғына түгел, ә төрлө милләттәр араһындағы бәйләнеште тәьмин итеүсе иң ҡеүәтле рухи көс. Һәр халыҡ үҙенә генә хас ижады, мәҙәниәте булған Хоҙай балалары. Бер милләт тә бер-береһенең тормошон, булмышын, холоҡ-фиғелен, тарихын ҡабатламаған кеүек, ижадта ла ныҡ айырыла. Әлбиттә, төрлө халыҡта тышҡы ҡиәфәте менән оҡшаш музыка ҡоралдары бар, тик уларҙан урғылған моң төрлө. Мәҫәлән, башҡорттоң ҡурайынан сыҡҡан моңдо бер ниндәй ҙә музыка ҡоралы ҡабатлай алмай. Шуға күрә, халҡыбыҙ моңон бар донъяға таратыу, уның йырҙарын ишеттереү өсөн төрлө йүнәлештә, стилдә эшләгән ижадсылар булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡайҙалыр рок фестивале үтә икән, унда нәҡ ошо стилдә уңышлы ижад итеүсе кеше йәки төркөм юлланырға тейеш. Башҡа төрлө музыкаль стилдәге конкурс һәм фестивалдәргә лә милләтте лайыҡлы күрһәтә алырҙай ижадсыны ебәреү мотлаҡ. Сәхнәләге бер нисә минутлыҡ сығыш тотош халыҡ тураһында төшөнсә бирә. Шуға күрә, һәр ижадсы, һәр ижади төркөм үҙенең эшенә етди ҡарарға тейеш.

Беҙ үҙебеҙҙең исемде тәүҙә республиканан ситтә таныттыҡ. Париж, Вена, Кельн, Мәскәү, Лондон, Астана һәм башҡа ҡалаларҙа, шулай уҡ Төркмәнстанда, Тыва республикаларында уҙған халыҡ-ара конкурс һәм фестивалдәрҙә ҡатнашып, призлы урындар һәм лауреат исеме яуланыҡ. Ул сығыштарыбыҙҙа үҙебеҙҙе



***Башҡорттоң ҡурайынан сыҡҡан моңдо бер ниндәй ҙә музыка ҡоралы ҡабатлай алмай. Шуға күрә, халҡыбыҙ моңон бар донъяға таратыу, уның йырҙарын ишеттереү өсөн төрлө йүнәлештә, стилдә эшләгән ижадсылар булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡайҙалыр рок фестивале үтә икән, унда нәҡ ошо стилдә уңышлы ижад итеүсе кеше йәки төркөм юлланырға тейеш. Башҡа төрлө музыкаль стилдәге конкурс һәм фестивалдәргә лә милләтте лайыҡлы күрһәтә алырҙай ижадсыны ебәреү мотлаҡ. Сәхнәләге бер нисә минутлыҡ сығыш тотош халыҡ тураһында төшөнсә бирә. Шуға күрә, һәр ижадсы, һәр ижади төркөм үҙенең эшенә етди ҡарарға тейеш.***

***✓ Әлеге көндә ошо йүнәлештә "Арғымаҡ", "Заман"дан тыш, "Әс-сәләм", "Йатаған", "Тамға", "Елмерҙәк", "Әйле ҡатай", "Урал тау", "Аҡтамыр", "Байембәт", "Юлдаш", "Сал Урал" һәм башҡа этно-төркөмдәр ижад итә.***

тыуған республикабыҙҙы, милләтебеҙҙе лайыҡлы күрһәтә алғанбыҙҙыр, тип ышанам.

**Музыкант булыу - ул һөнәрме, әллә миссиямы?**

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Һәр кешене Хоҙай был ергә билдәле бер миссия менән ебәрә. Берәүҙәр ҡатмарлы операциялар эшләп, кеше ғүмерен ҡотҡара, икенселәр балаларға белем бирә, өсөнсөләр үҙенең булмышын сәнғәттә таба. Музыкант - кешене рухи яҡтан дауалаусы, оло эштәргә илһамландырыусы, ауыр мәлдәрҙә халыҡтың күңелен күтәреүсе. Моң - кешегә әйтергә теләгәнендe һүҙһеҙ ҙә еткерә алыу мөмкинлеге биргән тормош бүләге. Нимәлер әйтергә теләгән сәйәсмән, халыҡ алдына сығып, ялҡынлы телмәр тота. Яҙыусы ошо уҡ бурысты атҡарыу өсөн ҡулына ҡәләм ала. Ә музыкантҡа бының йәһәтенән ҙур эш атҡарып, минә музыка илендә үҙ урынымды табырға ярҙам итте. Колледжда белем алғанда уҡытыусым гитарала башҡорт композиторҙары йырҙарына аранжировка эшләүҙе бурыс итеп ҡуя ине. Нәҡ шул ваҡытта күңелемдә башҡорт музыкаһына, башҡорт халыҡ ижадына икенсе яҡтан сығып ҡарау тойғоһо асылғандыр, тип уйлайым. Академияла башҡорт музыкаһы моңдарының һәм джаздың яңғырашы бербереһенә тура килеп тороуын асыҡланым - көнбайыш джаз гармонияһы башҡорт көйө тактына "ятып" ҡына тора, йәғни, джаздың аккордтары "башҡортса" сыңларға мөмкин, тигән һығымта яһаным. Башҡорт көйҙәрен гитарала уйнағанда классик гитара сыңы ла, көй ҙә бөтөнләй икенсе төрлө яңғырай. Башҡорт моңо уйын ҡоралының мөмкин-

Башҡорт халыҡ йырҙарын һәм башҡорт композиторҙары көйҙәрен гитара өсөн махсуслашҡан итеп үҙгәртеүҙең дә, уларҙы гитарала уйнауҙың да бер ҡыйынлығын күрмәйем. Иң бәкәлгә һуҡҡаны - ваҡыт тарлығы. Үҙем өсөн алда был өлкәлә "йөҙөп" йөрөп эшләрлек бай материал һәм ҙур перспектива күрәм. Ә аспирантурала белемемде камиллаштырыуым һәм башҡорт музыкаһы тураһында фәнни эш яҙыуым ижадымды тағы ла тулыландырыр, тип ышанам.

**Әлеге ваҡытта башҡорт сәхнәһендә төрлө этно-төркөмдәрҙең һаны артты. Конкурентлыҡҡа нисек ҡарайһығыҙ, егеттәр?**

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Әлеге көндә ошо йүнәлештә "Арғымаҡ", "Заман"дан тыш, "Әссәләм", "Йатаған", "Тамға", "Елмерҙәк", "Әйле ҡатай", "Урал өҫтәй, ижади йоҡомһорауға бирелеүҙән ҡотҡара, ижади процесты етеҙерәк һәм йылдамыраҡ итә.

**Радмир МУФТАХИН:** Беҙҙең арала ҡапма-ҡаршылыҡ тойғоһо юҡ. Барыбыҙ ҙа бер-беребеҙҙең уңышына һөйөнөп, ҡаҙаныштарыбыҙға бергәләп ҡыуанып, маҡсатыбыҙға ынтылып йәшәйбеҙ, ижад итәбеҙ. Бөтә этно-төркөмдәргә лә берҙәмлек, башҡорт халыҡ ижадына һөйөү һәм ихтирам тойғоһо хас. Ошоноң менән ғәйрәтле лә инде беҙ.

**Ринат РАМАҘАНОВ:** Тормошта барыһы ла ниәттән тора. Әгәр ҙә ниәтең, ғәмәлең изге булып, тик үҙеңә генә түгел, ә халҡыңа ла файҙалы икән, бөтә эштәрең уң буласаҡ. Шулай уҡ маҡсатыңа өлгәшеү өсөн төрлө һынауҙар алдында бөгөлөп төшмәҫкә, ниндәй ауыр мәлдәрҙә лә теште ҡыҫып алға барырға кәрәк. Йәш ижадсыларҙың һаны әҙәйгән һайын, башҡорт халыҡ моңон киләсәк быуынға еткереүселәр ҙә кәмей. Ә этно-төркөмдәрҙең күп булыуы һәм уларҙың ижады ошо өлкәгә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға, балалар, йәштәр араһында башҡорт халыҡ ижадын популярлаштырыуға килтерә. Беҙ бөтәбеҙ бергә халҡыбыҙ моңон киң йәмәғәтселеккә танытыу, йырҙарыбыҙҙы ишеттереү йәһәтенән бер-беребеҙгә терәк һәм таяныс булып алға барабыҙ.

**Бер-берегеҙҙең ижадын нисек баһалайһығыҙ?**

**Ринат РАМАҘАНОВ:** "Арғымаҡ" ҡурайсы ҡүҙлегенән сығып формалашҡан булһа, "Заман" - гитарасы ҡүҙаллауынан барлыҡҡа килгән төркөм. Беҙ оҙайлы эҙләнеүҙәрҙән һуң ғына, бихисап эксперименттар үтеп, төркөмдөң әлеге стилен таптыҡ һәм уны шымартыу, камиллаш-

# ФЕКЕР ТУПЛАУҒА...

## булышлыҡ итә



*Милли моң - ул халыҡ тауышы. Һәр халыҡтың да милли моңо тотош донъя йәмәғәтселегe аңында шул милләт тураһында фекер туплауға булышлыҡ итеүе менән әһәмиәтле. Шуға күрә ижадын үҙ халҡына ғына түгел, ә башҡа милләттәргә лә еткерергә, уларға таныулы, аңлайышлы итергә маҡсат ҡуйған ижади коллектив иңендә оло бурыс ята. "Заман" этно-проекты башҡорт моңон сит илдәрҙә, икенсе ҡитғаларҙа ла яңғыратыу, уны популярлаштырыу буйынса уңышлы эшләй. 2014 йылда Ҡаҙанда уҙған "Turkvizion - 2014" халыҡ-ара йыр конкурсында 3-сө, ә яңыраҡ Италияның Удинэ ҡалаһында булып үткән "Suns Europe - 2015" халыҡ-ара фестивалдә 2-се урын яуланыҡ. Тәүгеһендә төрки телле халыҡтар араһында Башҡортостан, ә икенсеһендә бөтә донъя алдында Рәсәй исеменән сығыш яһаныҡ.*

өсөн моң, көй, аһәңлелек кәрәк. Ләкин мондо дөрөҫ ҡуллана белеү ҙә мөһим. Мәҫәлән, ҡурайыбыҙҙы ғына алайыҡ. Ҡурайҙа уйнағанда бик иғтибарлы булырға, һаҡ эш итергә кәрәк, сөнки уның моңо менән халыҡты юғарылыҡҡа күтәреп булған кеүек, уны түбәнәйтергә лә мөмкин. Атабабаларыбыҙ ҡурайҙа бөтә ғаләмде иңләп, сиктәрҙе үтеп сығып, бөтә йәнен биреп уйнаған. Шуға күрә, халыҡ йөрәгенә, тамашасы күңеленә үҙеңдең моңоңдо еткерергә теләйһең икән, ошондай уҡ хәлгә кереү, уны аңлау мөһим. Хоҙай тарафынан ҙур һәләт бирелеп тә, ижадты йөрәгең аша үткәрмәһәң, ул халыҡ күңеленә барып етмәй. Шуға күрә, тормошта үҙеңдең миссияңды дөрөҫ билдәләп, уны ғүмерлек һөнәрең итерлек мөмкинлек табыу - үҙе бер бәхет. Аҡылды кеше йәшәү барышында, ғүмер буйы йыя, ә аң, рух ҡан аша, халҡының йыр-моңо, ижады аша бирелә. Нескә күңелле ижад кешеләренең ошо бәйләнеште нығыраҡ тойоп, уны башҡаларҙың йөрәгенә үтеп инерлек итеп "әйтә" алыуы - уларҙың миссияһы.

**Радмир, һине беҙ башҡорт халыҡ йыр-көйҙәрен классик гитара ҡылдарына һалыусы итеп тә беләбеҙ. Бындай уникаль ижадтың үҙенсәлеге һәм ауырлығы нимәлә?**

**Радмир МУФТАХИН:** Классик гитара буйынса белемде мин тәүҙә Салауат ҡалаһының музыкаль колледжында, унан Мәскәүҙә Маймонида исемендәге Дәүләт классик академияла алдым. Ике уҡыу йортонда ла уҡытыусыларымдан уңдым. Улар минең профессиональ кимәлемде үҫтереү лектәрен техник йәһәттән байытһа, гитара иһә башҡорт көйөн яңыса ишеттерә. Был асыш миңә гитарала уйнау өсөн эшкәртелгән башҡорт халыҡ йырҙарынан торған бай репертуар тупларға булышлыҡ итте. Шулар араһынан "Һандуғас"тың һәм "Башҡорт бейеү көйө"нөң донъя кимәлендә билдәлелек яулаған виртуоз гитарасыларҙың репертуарында булыуын һәм төрлө концерттарҙа яңғырауын үҙем өсөн оло баһа итеп ҡабул итәм.

тау", "Аҡтамыр", "Байембәт", "Юлдаш", "Сал Урал" һәм башҡа этно-төркөмдәр ижад итә. Улар үҙҙәренең илһөйәрлеге, ижадтарының тәрәнлеге менән айырыла. Бер төркөмдөң дә ижады икенсеһенекен ҡабатламай. Һәр төркөмдөң үҙенә генә хас сифаты, тамашасы өсөн яҡын булған һөйкөмлөлөгө бар. Шулай уҡ беҙ төрлө йүнәлештә эшләйбеҙ, шуға күрә беҙҙең арала конкурентлыҡ булыуы мөмкин түгел. Яңынан-яңы этно-төркөмдәрҙең барлыҡҡа килеүе, киреһенсә, беҙгә көс-дәрт ҙың ошоно аңлауы, һанлауы мөһим. Һәр кемдең үҙ тәҡдире, үҙ юлы булған кеүек, тырышлыҡ та барыһына ла бер тигеҙ бирелмәгән. Был йәһәттән йәштәребеҙҙең өмөтлө булыуы шатландыра.

**Радмир МУФТАХИН:** Һуңғы ваҡытта ошондай тенденция күҙәтелә. Республиканың музыкаль уҡыу йорттарына барыусы балаларҙың күбеһе традицион классик музыка ҡоралдарына өҫтөнлөк бирә, ә ҡурай, думбыра һымаҡ халыҡ ҡоралдарын һайлаусылар кәмей. Ула-

тырыу өҫтөндә әүҙем эшләүебеҙҙе дауам итәбеҙ. Ә "Заман" этно-проекты әлегә камиллашыу юлында, репертуар өҫтөндә әүҙем эшләйҙәр. Төркөм составындағы музыканттарҙың барыһының да профессионал булыуы уның ижадын байыта, тәрәнәйтә. Уларҙың һәр береһенең төркөмдөң эшмәкәрлеген яҡшыртыу буйынса үҙенә генә хас ҡарашы бар. Ләкин шул уҡ ваҡытта улар тырым-тырағай түгел, ә дөйөм эшләү, ижад итә белеү йәһәтенән көслөләр. "Заман"дың уңышы - һәләтле етәксе ҡулы аҫтында берҙәм рәүештә яуланған ҡаҙаныш. Уларға ижади уңыштар, дәрт һәм илһам теләйем.

**Радмир МУФТАХИН:** "Арғымаҡ"тарҙың ныҡышмалы эшләү һәләтенә, һәр ваҡыт үҫеш юлында булыуҙарына, сағыу сәхнә номерҙары ҡуйыуҙарына һоҡланып ҡарайым. Ижади коллективтағы һәр музыкант үҙенең урынында, улар бер-береһен тулыландырып, ижадтарын юғарылыҡҡа күтәрәләр, уңышҡа өлгәшеү өсөн физик һәм рухи көстәрен йәлләмәйҙәр. Тамашасы йөрәгендә күптән үҙ урынын тапҡан "Арғымаҡ"тарға ижади сәмдәренең бер ҡасан да һүнмәүен теләйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Уй-тойғоларҙы һәм хистәрҙе аңлатыу өсөн һүҙҙәр етмәгәндә, моң ярҙамға килә", тиҙәр. Бөгөнгө әңгәмәселәр өсөн моң, музыка, көй һүҙҙәрҙән дә ҡиммәтерәк төшөнсә. Уларҙың заманлаштырылған, әммә туған халҡының моңонан һут алған һәм ошоноң менән көслө ижады бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Үҙҙәрен баһалаған һәм үҙ иткән тамашасылары булыуы менән бәхетле төркөмдәрҙең бараһы юлдарының шыма һәм һөҙөмтәле булыуын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
әңгәмә ҡорҙо.

**✓ Төштән һуң теге уҡытыусыны оҙатып ебәрҙеләр. Күҙ йәштәре менән һәр береһен ҡосаҡлап һөйөп айырылышты ул. Яңы кешеләр алып килеп, бындағыларҙы сығарып йөрөй торған ҡара тәҙрәле машинаға ултыртып алып киттеләр.**





Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# АЛДА ҒҮМЕР БАР ӘЛЕ

ПОВЕСТЬ

Дауаланыусыларҙың күптәре кешелек ҡиәфәтен юғалта барған халыҡ икән. Эскелектән, наркоманиянан миктәгәндәр әллә һуңғы төйәген эҙләп килгән, әллә туғандары тапшырған үҙҙәрен. Берәүҙәре эшләргә теләмәй ҡарышып ғауғалаша, икенселәре, киреһенсә, өтәләнеп йөрөп нимә менәндер була, өсөнсөләре зомби хәлендә "ал" тиһәләр алып, "һал" тиһәләр һалып йөрөй. Палыч кеүек үҙ аҡылында булып, һәүетемсә генә гәпләшеп булғандайҙар ҙа юҡ түгел. Һәр кемгә бурыстар бүлеп бирелгән, ялан кәртәләрҙә сусҡа көтөлә, арыраҡ ҡош-ҡорт, ҡуян ситлектәре теҙелеп киткән. Шуларҙы ашатып, тәрбиәләп көндәре үтә дауаланыусыларҙың. Башҡаларға нисектер, Булатҡа табип иртәле-кисле йотоуға таблеткалар, ике көнгә бер система яҙҙы. Ошо процедураларын башҡара ла, әйтеүҙе лә көтмәҫтән төҙөлөш яғына йүнәлә.

Бергә эшләгән малайҙың бөтөнләй хәл генәһе юҡ. Оҙаҡ йөрөй алмай, "ломка"һы башлана. Үҙ аллы үткәрә алмағанда санитарҙар килеп бәйләп һала, ҙур булмаған доза ҡаҙай. Йәлләй уны Булат. Бер көн "Ҡайһы арала бындай хәлгә төшөп өлгөргән тиһең, бала ғына бит әле", - тигәйне, Палыч Эдиктың егерме йәшлек егет булыуын әйтеп аптыратты. Баҡтиһәң, бәләкәйҙән теләһә нәмә тартып, еҫкәп йөрөп ағыуланып бөткәнме - үҫмәй ҡатып ҡалған икән. Уйлап ҡараһаң, Булаттан өс йәшкә генә кесе, ә икеһен бергә ҡуйһаң, айыу менән ҡуян кеүектәр. Палыч бындағы һәр береһенең яҙмыш тарихын белә. Тәүге ҡарашҡа өндәшмәҫ, йомоҡ ҡартҡа оҡшаһа ла, һораһаң-һорамаһаң да нимәләр хаҡында һөйләп, фаразлап алырға ярата. Унан алынған мәғлүмәттәр буйынса бында тормош тарафынан этеп-төртөлгән яралы йәндәр генә йыйылған. Булат та шуларҙың береһе булып сыға инде. Ул быға ла, башҡаһына ла, нимәгә лә күнергә риза, тик шул эскелеккә башҡаса боролоп ҡарамаҫлыҡ ҡына булһын. Апаһының күҙҙәренә ышаныслы итеп баға алғыһы, уның өмөттәрен аҡлағыһы килә.

Ашханала бөгөн төшкө аш шау-шыулы. Утыҙ биш-ҡырҡ тирәһендәге ирҙе оҙаталар. Ул бында дүрт ай дауаланған, буйтым сәләмәт әҙәм төҫө алған, яҡшы ашау, физик эш тәненә ит ҡундырған. Сығыуға тип өҫтөнә лә ҡиммәтле булмаған спорт костюмы кейҙергәндәр. Хушлашыуға һүҙ алғайны, Булат ирҙең ярайһы уҡ шыма телмәренә аптырап ҡуйҙы. Уның ҡаштарын дуғаландырып ебәреүенә Палыч аңлатма бирҙе:

- Уҡытыусы булған был кеше, тарих уҡытыусыһы. Ҡатыны ташлап киткәс эскелеккә һабышҡан. Өйөндә ятып үлер тип күршеләре кем ашалыр ошондағыларға хәбәр иткән дә барып алғандар. Аралашыуға яҡшы әҙәм, культурный. Сыҡҡас эсмәһә ярар ине, бәлки, кире эшенә лә алырҙар...

Булат халыҡ араһында теге ауырлы ҡатынды аңғарып ҡалды. Ситтәге бер өҫтәл артында гәүләшеүселәрҙе шым ғына күҙәтеп ултыра. Ябыҡ ҡына, бәләкәй генә. Ап-аҡ арыҡ йөҙөндәге ҙур күҙҙәре менән ян-яғына ҡурҡҡан ҡоралай ише ҡапыл-ҡапыл ҡараш ташлап ала ла, тәрилкәһенә төбәлә. Ҡалағының осона эләктереп сәмсенеп ултыра. Булаттың үҙенә иғтибар иткәнен аңғарғас, бөтөнләй бөршәйҙе. Ул да булмай, тороп сығып уҡ китте. Ошондай ғына кәүҙәлә ҡаҙандай оло ҡорһаҡ. Ҡалайтып күтәреп йөрөйҙөр.

- Был ҡатындың ауырыуы нимәлә икән? - Булат берәүгә лә төбәмәһә лә, һорауын ҡысҡырып әйтте.

Сергей Павлович көлдө генә:

- Күрмәйһеңме ни, ауырыуы үҙендә.

- Ну... ауырлы бит...

- Ана шул ауырлы булғанға ла барыр урыны юҡ, үгәй атаһы көсләгән дә, әсәһе, ошо хәлгә ҡалғанын белгәс, ҡыуып сығарған. Богдан Радионовичтың командаһынан кемдер берәү йәлләп бында алып килгән. Вот йәшәй инде.

- Һы. - Булаттың был мәсьәләлә әйтер һүҙе лә, фекере лә юҡ ине. Был уның өсөн бөтөнләй ят, аңлайышһыҙ хәл. Ишеткәндәрен нисек ҡабул итергә лә белмәне.

Төштән һуң теге уҡытыусыны оҙатып ебәрҙеләр. Күҙ йәштәре менән һәр береһен ҡосаҡлап һөйөп айырылышты ул. Яңы кешеләр алып килеп, бындағыларҙы сығарып йөрөй торған ҡара тәҙрәле машинаға ултыртып алып киттеләр. "Күреһегеҙ, ул аяҡҡа баҫып, нығынып эшләй башлағас, күстәнәстәр менән килеп китер әле", - тип ҡалыусыларҙы дәртләндереп ебәргәндәй итте оҙатыусылар араһында булған Богдан Радионович. Уның һүҙҙәренән ысынлап һәр береһе үҙҙәренең дә бынан сығыр көндәрен күҙ алдына килтерҙе. Һәр береһе яҡшыға, яҡтыға өмөтләнде.

Көндәр үтә торҙо. Булат ике тапҡыр баш табиптан телефон һорап алып апаһына шылтыратты. Былай яҡшы торалар икән, уның өсөн борсолалар инде. "Юҡҡа ҡайғырмағыҙ, минең барыһы ла яйлы, эшләйем, дауаланам, ике айҙан ҡайтып төшөрмөн", - тип тыныслandырҙы уларҙы егет. Ай эсендә бригадаһы менән сусҡа һарайын төҙөп ҡуйып, әле ҡош-ҡорт кетәгенә тотондолар. Унан ауырыуҙар йәшәгән палаталарҙың иҙәндәрен алмаштыраһы бар, сереп төшөргә тора. Дауаланыу срогын тамамлауға, планлаштырғандарын башҡарып ҡуймаҡсы Булат. Ошондай оло изгелек күрһәткән Богдан Радионович һәм уның дауаханаһына булған рәхмәтен тағы ла нисек ҡайтарһын инде ул.

* * *

Төн уртаһында аҙарынып ҡысҡырған тауыштан һиҫкәнеп уянды ла, ни булғанын аңлай алмай ятты Булат. Ул арала тауыш тағы ла әсерәк булып ҡолаҡты телде. Кемдер ярҙам һорай түгелме? Ҡатын-ҡыҙ сарылдаймы?! Ауаз, ниһайәт, аңына барып еткәс, һикереп тороп коридорға ташланды. Сыҡты ла ҡайһы яҡҡа йүгерергә белмәне. Тағы ишетелде тауыш, әллә илай, әллә иңрәй. Туҡта, остағы бүлмәнән, теге ҡатын йәшәгәндән килә бит! Барып ишеген һелкә тартып асып ебәргәйне, иҙәндә ултырған ҡатынды күреп юғалып ҡалды. Ҡорһағын ҡосаҡлап бөгөлөп төшкән, башын да күтәреп ҡарай алмай. Нисек ярҙам итергә белмәгән егет ҡатындың әле был, әле теге яғына сыҡты, тартып торғоҙмаҡсы булып ҡулдарын һуҙҙы ла, ҡайһы еренә ҡағылырға белмәй кире алды. Иҙәндәге һыҙлана бирҙе:

- А-а-аһ! Ярҙам итегеҙ! Ярҙам итегеҙ миңә!..

- Ни эшләргә һуң?! Ҡалайтырға?!

- Врач... Врач кәрәк...

Булат ҡатынды ашатлап һикереп тигәндәй коридорға атылды. Санитарҙар йәшәгән бүлмәнең ишегенә тондорорға тип йоҙроғон күтәргәйне генә, эстән инде бирсәткәләренә ҡәҙәр кейеп алған аҡ халатлы ишекте асып та ебәрҙе:

- Ишетәм, ишетәм. Хәҙер врач килә, әйҙә һин өҫкә мендереш.

Булат, хәҙер инде бер үҙе булмағас, ҡыйыуыраҡ ҡыланды, инде тамам хәлһеҙләнгән ҡатынды ялп иттереп кенә күтәреп санитар артынан эйәреп икенсе ҡатҡа мендерҙе. Палатаға ингәс, теге топчанға һалырға ҡушты. Егет ҡулындағы йөгөн йә ултыртырға, йә һуҙып һалырға белмәй өйөрөлдө. Уның шулай ҡаушап ҡаңғырыуын ҡыҙыҡ күреп ҡарап торған санитар һаһылдап көлөп ебәрҙе:

- Атай булырға йөрөйһөңмө әллә, Булатик? Ниңә улай сәбәләнәһең?!

Шунда ғына үҙенең артыҡ тулҡынланыуын аңлап, уңайһыҙланыуҙан ҡыҙарып-бүртенеп ҡатынды урынға терәне һәм ауырыуҙың һулыған үҫемлек кеүек һәлберәп төшөүенән:

- Үлеп ҡуймаҫмы?.. - тип ҡурҡып һораны.

- Ниңә үлһен ул, хәҙер бәпәйе тыуыр ҙа тороп китер.

- Бәпәйе?! - Нисек Булаттың үҙенең башы етмәгән быға. Эйе лә инде, ауырлы ҡатындың балаһы тыуалыр ҙа һуң.

Ары санитар ярҙамсыһын коридорға ҡыуып сығарҙы ла, тимер приборҙарын салтыр-солтор иттереп бала ҡабул итеүгә әҙерләнә башланы. Булат аҫҡа төшөп ятыуҙы урынһыҙ һынап, ишек төбөндә һерәйеп тора бирҙе. Бындай хәлдән һуң, етмәһә, кемдер берәүҙең ул ҡәҙәр өҙгөләнеүҙәрен белә тороп, нисек сыҙап ятмаҡ кәрәк. Йә был врачы ҡайҙа, тип уйлап та өлгөрмәне, коридор осонда Богдан Радионович күренде. Ҡыҙыу атлап килгән байы Булатҡа бер генә һынаулы ҡараш ташланы ла, палатаға инеп тә сумды. Эстән берсә ҡатындың ыңғырашыу, берсә врачтың иркә өндәшеүе аралашып ишетелә торҙо. Шул тирәлә кәлеп һуғып ҡына ла арыны Булат. Ә теге ауырыған бисараға ни сара? Инде лә был хәл тамамланмаһа, инергә лә нимәләр эшләргә тип ынтылғайны ғына, ҡапыл яр һалған сабый тауышы баҫҡан урынында һеңгәҙәтте егетте. Шул килеш бер килке тыңлап торғас, ауыҙы үҙенән-үҙе йырылды, хатта тауышланып уҡ: "Ур-р-а-а-а" - тип һуҙып ебәрҙе. Кеше тыуҙы!

* * *

Һарай ҡыйығын ябыу менән мәшғүл булып йөрөһә лә, ике күҙе шул ике тәҙрәлә Булаттың. Быяла аръяғында әллә ниҙә бер күренеп ҡалған аҡ шәүләне аңғарып ҡалырға тырыша. Нисә көн инеп сығырға ла итә үҙе, тик ҡыйыулығы ғына етмәй. Нимә тип барып инһен инде? Бәпәйегеҙҙе күрергә килдем тиһенме? Ауылда, белеүенсә, бәпәй ҡарарға ҡатын-ҡыҙҙар ғына йөрөшә. Уға, ир кешегә, етмәһә, ете ят әҙәмгә, ярамайҙыр ул...

Ятаҡ ишеге шап иткәнгә ҡарашын күсергәйне, әле генә уйында булғандың тас менән кер күтәреп килеп сыҡҡанын күреп, ҡулынан сүкешен төшөрөп ебәрә яҙҙы. Ҡатын үрелеп йүргәктәрен элә башланы. Туҡта, ошонан яйлы форсат булмаҫ! Булат һикереп төшөп өҫ-башын ҡаҡҡыланы ла, оҙон-оҙон баҫып ҡатын янына килде.

- Һаумыһығыҙ! - Ихлас итеп йылмайҙы.

Тик ҡатын күҙ сите менән генә ҡарап алып, һиҙелер-һиҙелмәҫ баш һелкеү менән сикләнде, эшенән туҡтаманы ла. Әммә егет бирешмәҫкә булды:

- Хәлегеҙ нисек, Сафия? Бәпәйегеҙ менән ҡотлайым.

Был һүҙҙәрҙән Сафия күҙҙәрен тултырып егеткә ҡарап уҡ ҡалды.

- Дөрөҫ әйтмәйемме әллә? Бында һеҙҙе Софья тиҙәр, буғай. Беҙҙеңсә Сафия инде. Йырҙағы һымаҡ: Сафия, ҡарале, алда ғүмер бар әле...

Ҡатындың сырайы яҙылманы, әллә шаяртыуҙы ҡабул итмәне, әллә был йыр бөтөнләй ишеткән нәмәһе түгел. Уйлап ҡараһаң, русса һөйләшкән кеше башҡортса йыр тыңламайҙыр ҙа.

- Исем ҡуштығыҙмы? - Булат һаман ныҡышты.

- Ҡ-ҡуштым.

- Кем тип?

- Самира.

- Ыһы, матур исем.

- Ә һеҙ мине beләһегеҙме ни?

- Беләм тип... Беләм инде, бында йәшәгәс. Теге мәл...

- Эйе... һеҙ булдығыҙ бит әле, - ҡатын шул ваҡиғаларҙы иҫләргә тырышты. - Рәхмәт һеҙгә. - Шулай тине лә боролоп китә лә башланы.

Башҡаса тотор сәбәп тә, әйтер һүҙ ҙә тапманы Булат. Ахырҙа алыҫлаша барғас:

- Самираны инеп күрергә яраймы? - тип өндәште.

Ҡатын ҡайырыла бирҙе лә көлөмһөрәне:

- Әллә... бик теләһәң, күр һуң.

Ышанманы, ысынға алманы был сәйер теләкте. Тик юҡҡа. Бер кис һаҡ ҡына итеп уның ишеген шаҡыныlar. Асып ебәрһә, сәңгелдәк күтәргән Булат, Сергей Павлович, ауыҙы ҡолағына еткән Эдик тора.

- Бәпәй менән ҡотлайбыҙ! - тиҙәр бер тауыштан.

Бөтөнләй юғалып ҡалды йәш ҡатын, әле бер, әле икенсе нәмәһен рәтләгән булды, ыуаланды. Ахырҙа ҡотолоу сараһын тапмай, карауатта мышнаған төргәккә иҙәне, йәнәһе, ана, ҡарағыҙ. Шуны ғына көткән ирегеттәр күмәкләшеп килеп эйелде лә, тын алмаҫтан текәлде. Сабый йоҡо аралаш ауыҙҙарын салшайтып ебәреп көлгәндәй иткәйне, барыһының да йөҙө балҡыны.

- Ҡарале, уже көлә белә, - тип сәпәкәйләп үк ебәрҙе Эдик.

- Атыу, һиңә ҡарағанда күпте беләләр әле ул, - тип шаяртты Палыч.

Булат хистәрен әйтеп аңлатыр һүҙ таба алманы, бары тик уларҙы күҙәтеп йылмайып торған әсәгә күтәрелеп ҡарап ҡына ҡуйҙы.

Ниһайәт, Палыч иҫенә килде лә:

- Мә әле, Софья, ошоноң төбөнә простыня тегеп бир, беркетеп китәйек, - тип сәңгелдәкте һуҙҙы.

- Ой, ниңә мәшәҡәтләндегеҙ, - тиһә лә, шунда уҡ энә һабаҡлап алды ҡатын.

Был кисте күпкә яҡынлашты осраҡлы өйҙәш булған дүртәү. Дөрөҫөрәге бишәү, шул бишенсе бәйләне бит уларҙы. Эдик инәлеп-ялбарып һорап баланы ҡулына алды, еҫкәп ҡараны. Булаттың быға баҙнаты етмәне, әммә һиҙҙермәҫкә тырышып ҡатынға күҙ һалыуҙан тыйыла алманы инде. Йонсоу булһа ла ап-аҡ ҡына һылыуҡай икән дә был Сафия. Кәүҙәһе лә тал сыбығы ише булып ҡалған. Шулай үҙгәрә алыуына аптырарһың ҡатын-ҡыҙҙың.

**(Дауамы бар).**

✓ ***"Умырзая" фольклор ансамблендә, ысынлап та, бер урамда йәшәгән ирле-ҡатынлы 6 пар бейей. Улар колхоздар гөрләгән саҡтарҙа бейелгән бейеүҙәрҙе тергеҙеп, сәхнәгә алып сыҡты.***



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕНДӘ...

## халыҡтың тарихы ла, күңеле лә сағыла

**БР Мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостан юлдаш каналы, Республика халыҡ ижады үҙәге менән берлектә ойошторолған "Байыҡ - 2015" телевизион бәйгеһенең Гала-концерты йыл аҙағында уҙған иң сағыу тамашаларҙың береһе булғандыр, моғайын.**





Халыҡ бейеүе шуныһы менән үҙенсәлекле: унда милләттең тарихы ғына түгел, күңеле лә сағыла, тиҙәр. Хәҙер инде һигеҙенсе миҙгелен оҙатҡан "Байыҡ" телевизион бәйгеһенең әһәмиәте иһә ошо хәҡиҡәтте оноторға бирмәүендә. "Байыҡ" бит ул энциклопедия кеүек, күпме башҡорт бейеүен тергеҙҙе. 3 йәшлек балаларҙан алып күпме халыҡты дәррәү итеп бейергә өйрәтте. Минең быуыным әле бөйөк хореограф Фәйзи Ғәскәров мәктәбен хәтерләй, шуға ла тәжрибәне йәш быуынға тапшырыу кәрәк", - ти бәйгенең баһалама рәйесе, БАССР-ҙың халыҡ артисы Ратмир Бәҙретдинов.





Тамашасы булараҡ концертҡа килгән Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллин да, "Байыҡ" - ул башҡорт бейеүен милли идея дәрәжәһенә күтәргән проект, тип иҫәпләй. Яҡташыбыҙ әйтеүенсә, һәр милләттең рухы, күңел матурлығы халыҡтың ҡиәфәтендә, йөҙөндә, үҙен-үҙе тотошонда сағыла. "Башҡорттоң матурлығы уның бейеүендә күренә. Бына шуның өсөн дә бейеү сәнғәте ҙур әһәмиәткә эйә", - ти ул.





Иң ҡыҙығы, Гала-концертта ҡунаҡ булараҡ сығыш яһаған башҡа милләт бейеүселәре башҡорт өсөн бейеүҙәрҙең ябай сәнғәт төрө генә булмауын һиҙемләп өлгөргәйне. Санкт-Петербургтың "Сихаруди" ансамбле солисы Михаил Мамадашилиҙың: "Йөрәгем менән тоям, бейеүҙәрегеҙгә Күктәр тарафынан ниндәйҙер илаһи, бөйөк вазифа һалынған, ахыры", - тиеүе лә башҡорт бейеүенә иң юғары баһа түгелме ни?



Быуаттар буйына камиллашҡан башҡорт бейеүенең бөгөн яңырыу кисереүе хаҡында ла билдәләмәйенсә булмай. "Байыҡ" бай профессиональ бейеү сәнғәтенә ин кәрәкле төп төшөнсәне - халыҡсанлыҡты индерә алыуы менән тағы бер маҡтауға лайыҡ. Һәр төбәктең үҙенә генә хас тыпырлауҙары ла, башҡарыу үҙенсәлектәре лә яҡшы күренә унда хәҙер, сөнки халыҡ араһында бейеүҙәр, ғәҙәттә, атайҙан улға күсеп йөшәй. Яңғыҙ бейеүселәр араһында Гран-при яулаған Әбйәлил уҙаманы Ильяс Сафин да "Карт Байыҡ" бейеүен тәүге тапҡыр атаһы Сәғит ағайҙан өйрәнгән. Мөхәммәт Иҙрисовтан шәхсән һабаҡтар алыу бәхете эләкмәһә лә, унын бейеүен үҙ күҙҙәре менән күреп, йөрәгенә һеңдерә алған. Баш ҡалала байтаҡ ғүмер кисереп, данлыклы Ғәскәров ансамблендә музыкант булып эшләп йөрөгән еренән тыуған яғына ҡайтып, шәхси эшҡыуар булып китһә лә, күңел өсөн "Байыҡ" кеүек фестивалдәрҙең булыуына һөйөнөүен белдерҙе еңеүсе.

Өфө ҡалаһынан Нәркәс Юлдашеваның "Хан ҡыҙы" ла үҙенсәлекле башҡарылыуы менән айырылып торҙо. "Беренсе турға "Заһиҙә" бейеүен һайлағайным. Әммә уны Рәшиҙә апай Туйсина кеүек кимәлдә бер кем дә ҡабатлай алмаясаҡ. "Заһиҙә" - Рәшиҙә апайҙың бейеүе, ә "Хан ҡыҙы" минең һәләтемде аса торған бейеү. Тимәк, был донъяға һәр кеше башҡаларҙы ҡабатларға түгел, ә ниндәйҙер яңылыҡ алып килергә тыуа", - ти йәш бейеүсе. Нәркәскә лә бәйгенең Гран-приһы тапшырылды.

Тағы бер бәйгесе - С. Низаметдинов исемендәге Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжының "Койон" ансамбленең ҡыҙҙар һәм егеттәр төркөмө лә халыҡсан бейеүе менән тамашасыны таң ҡалдырҙы. Ансамблдең етәксеһе Юлиә Зәйнәшева әйтеүенсә, шыбаға буйынса икенсе турға "Тыпырлаҡ" бейеүе эләккәс, улар уны үҙенең төбәгенә хас тыпырлауҙар менән байытҡан. "Байыҡ" телевизион бәйгеһенең башҡорт бейеүҙәрен үҫтереүҙәге ролен баһалап бөтөп булмай. Юғиһә, бейеүҙәребеҙҙе замансаға әйләндереп бөтөп баралар ине бит. Баһалама ағзаларының талапсанлығы оҡшай, улар тап халыҡсанлыҡҡа иғтибарҙы күберәк бирә. Ансамбль менән шөғөлләнгәндә беҙ ҙә ҡыҙҙарға һикермәй, һеңдереп кенә бейегеҙ, тигән талап ҡуйһаҡ, егеттәргә, киреһенсә, рухлыраҡ, дәртлерәк баҫырға өндәйбеҙ. Колледжда көслө фольклорсыларыбыҙ, музыканттарыбыҙ бар, бергәләп халыҡ сәнғәте һағында торабыҙ", - ти Юлиә Рауил ҡыҙы. Учалылар ҙа ансамблдәр араһында иң юғары баһаға лайыҡ булды. Әйткәндәй, осоп-ҡунып, бейеүҙең хәрәкәте күренмәгән һәм аңлашылмаған бейеү бейегәндәр ҙә булды Гала-концертта, быны уларҙың тамашасыға шәп итеп бейеү техникаһын да үҙләштергәндәрен күрһәтергә тырышыуҙары тип кенә ҡабул итергә булалыр, моғайын.

Бәйгенең тағы бер күркәм яғы - өлкән йәштәге бейеүселәр. Уларҙың һәр ҡайһыһы тураһында оҙаҡ итеп һөйләргә булыр ине. "Ғүмерҙә сәхнәгә сыҡҡаным булманы. Тик ҡатын-ҡыҙ берәй нәмә уйлап сығарырға ғына тора бит ул. "Байыҡ"та ҡатнашайыҡ, тип, беҙгә лә бейеү ҡомарын йоҡторҙолар. Гала-концертҡа килеп еткәс, ағай-еңгәләрҙе һынатмайым тип, тағы ла дәртлерәк баҫып бейергә тура килә", - тип шаярта Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан Сәлмән ағай Теләүсин. "Умырзая" фольклор ансамблендә, ысынлап та, бер урамда йәшәгән ирле-ҡатынлы 6 пар бейей. Улар колхоздар гөрләгән саҡтарҙа бейелгән бейеүҙәрҙе тергеҙеп, сәхнәгә алып сыҡты.

Гран-при яулаусы Күгәрсен апайҙары "Хәйбулла байығы" менән сығыш яһаны. "Байыҡ" беҙгә ҡартайырға форсат бирмәй, етмеште ҡыуып барһаҡ та, күңелебеҙ йәш", - тиҙәр улар. Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылынан "Йәш йөрәктәр" фольклор коллективы етәксеһе Мәрйәм Ишембаева әйтеүенсә, был апай-ағайҙарға дан да, бүләктәр ҙә кәрәкмәй. Баш ҡалаға килеп, ошондай таланттар менән бергә бер сәхнәлә бейеү - үҙе бер ғүмер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорттоң бейеүенә генә түгел, донъяла тиңе булмаған музыка ҡоралы - башҡорт ҡурайына ла дан йырланды "Байыҡ - 2015" телевизион бәйгеһенең Гала-концертында. Өфө дәүләт сәнғәт академияһы, Башҡорт дәүләт ауыл хужалығы университеты, Өфө сәнғәт училищеһы, Өфө урман хужалығы техникумы, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты ҡурайсылары, бейеүселәр сәхнә тултырып баҫып торған саҡта, милли мәҙәниәтебеҙ өсөн күңел тыныс барыбер ҙә. Сөнки йырҙарыбыҙ ҙа, бейеүҙәребеҙ ҙә, ҡурайыбыҙ ҙа халҡыбыҙ рухының, асылының, йәшәйешенең айырылғыһыҙ өлөшө бит.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

✓ *Кешенең аяҡ табанында уның организмын көйләүгә булышлыҡ итеүсе нөктәләр бар. Мин һыҙлана-һыҙлана Һаҡмар буйы таштарына баҫып йөрөгәндә шул нөктәләргә баҫып, үҙем дә белмәҫтән, үҙемде яҡшы тоя башлағанмын икән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠӘҺҮӘНЕҢ...
## ниндәйен яратаһың?

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Мәҫәлән, классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар киҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан гел ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә еңел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға яратыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

■ Һауаның бысраныуы кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефлегә әйләнә бара. Бигерәк тә 2,5 микрондан ҙур булмаған аэрозоль өлөшсәләр ҡурҡыныс, ти ғалимдар. Был өлөшсәләрҙе һауаға башлыса ҡаҙылма яғыулыҡтар ҡулланып эшләүсе сәнәғәт, энергетика, транспорт бүлеп сығара. Кешенең бер бөртөк сәсенең нәҙеклегенән 30 тапҡырға бәләкәйерәк булған был өлөшсәләр үлем осраҡтарының күбәйеүенә килтерә. Лондондың Гигиена мәктәбе докторы Кэтрин Тонн билдәләүенсә, бөтөн Европала яңы эшкәртеү ҡоролмалары ҡулланыу һөҙөмтәһендә һауаны бысратыусы матдәләрҙең кимәле күтәрелә. Шуға ла һуңғы йылдарҙа Көнсығыш Европа халҡы араһында инфаркт һәм инсульттан үлеүселәрҙең һаны 20 процентҡа артҡан. Белгестәр фекеренсә, экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙә йәшәүселәр йөрәкҡан тамырҙары сирҙәренә дусар булмай.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Эксперимент 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың ата-әсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими тоҡандарып ҡуйылған булһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра. Психологтар әйтеүенсә, экранда барған ситуацияларҙағы геройҙарҙың тойғолары бары уйын ғына йәки артыҡ шаштырып ебәрелгән була.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ТОТ ТА ҺАУЫҠ...



**Был системаға тиң дауа юҡ. Ышанмаһығыҙ, үҙегеҙ эшләп ҡарағыҙ. Һөҙөмтә шунда уҡ күренә. Көн һайын көсөгөҙ артҡанды тойорһоғоҙ. Әгәр көнөнә ике тапҡыр - иртән һәм кис башҡарһағыҙ, 10 көндән һуң проблемаларығыҙ юҡҡа сығыр. Бер ниндәй сығымдар ҙа, дарыуҙар ҙа кәрәкмәй, ҡулланыуға сикләүҙәр, тыйыуҙар юҡ. Был система тәү сиратта рәсми медицина баш тартҡан, түшәктә ятҡан, сирҙәре хроник йәки дауалап булмаҫлыҡ тигән мөһөр һуғылған кешеләр өсөн.**

Ошо системаға нигеҙ һалыусы япон Кацудзо Ниши ауырыуҙарынан ғына ҡотолоп ҡалмаған, ә йәшлекте оҙайтыусы сәләмәтлек системаһын эшләгән. Уның нигеҙендә алты ҡағиҙә ята һәм улар һәр кем эшләй алырлыҡ, һәр кем өсөн һөҙөмтәле.

Үҙегеҙҙең хәҡиҡәтегеҙ сығанағын табығыҙ һәм әлегә тиклем ҡараңғы, буталсыҡ булып тойолған донъя яҡтыға, сағыуға әйләнер, унда ауырлыҡтарҙың һәм проблемаларҙың йәшерен лабиринттары түгел, ә сәләмәтлек һәм шатлыҡ ҡына булыр.

Нишиҙың барлыҡ "алтын" күнекмәләрен шәрә килеш эшләргә кәрәк. Был тире һәм күҙәнәктәрҙең тын алыуын әүҙемләштерә.

..."Үкенескә күрә, улығыҙ 10 йыл да йәшәмәҫ", ти табип малайҙың ата-әсәһенә хәсрәтле ҡарап. Атай менән әсәй тын алырға ла ҡурҡып, шымып ҡала. Докторға ышанмаҫҡа бер генә сәбәп тә юҡ - уны Токиола барыһы ла яҡшы белә, берәү ҙә уның һығымталарында шикләнмәй. Әммә был юлы абруйлы белгес хаталана. Юҡ, диагнозда түгел. Эсәктәр туберкулезы һәм үпкәнең өҫкө өлөшөнөң лимфалары ялҡынһыныуы... теләһә кемдең күңелен төшөрөр ине. Әммә ул фараздарында яңылыша. Әле генә хөкөм сығарылған үҫмер 75 йәшкә тиклем йәшәйәсәк, ҙур инженер, профессор буласаҡ һәм үҙенең Сәләмәтлек системаһын эшләп, бөтөн донъяға танылыу яулаясаҡ. Япония Хөкүмәте уға "Милләт ҡаҙанышы" исемен бирәсәк. Әммә был һуңынан, ә әлегә... Әлегә Кацудзо Ниши китаптар уҡый. Медицина, анатомия, физиология, психология, философия буйынса хеҙмәттәрҙе ентекле өйрәнә, төрлө диндәрҙең тәжрибәләрен үҙләштерә. Сәләмәтлек тураһында күпме китап уҡып сыҡты икән ул? Педант япон уларҙың иҫәбен алып бара: 10 меңдән ашыу том. Ниши уларҙы өйрәнә һәм ҡасандыр төрлө илдәрҙә ҡулланылған һауығыу системаһын үҙендә тикшереп ҡарай. Һөҙөмтәлә ул ауырыуын еңеп кенә ҡалмай, нигеҙендә тәбиғәт ҡанундарына ярашлы йәшәү ятҡан система булдыра. Олоғайған көнөндә Ниши: "Сәләмәтлек системаһы мин уйлап тапҡан нәмә түгел, - тип баҫалҡы ғына белдерә. - Бары тик булған ысулдарҙың иң яҡшыларын һәм һөҙөмтәлеләрен генә һайлап алдым. Мин кеше организмын ауырыуҙар күҙлегенән түгел, ә сәләмәтлек яғынан ҡарайым". Ул кешене һәр береһен айырым дауалап булған, бер-береһе менән бәйләнмәгән ағзалар тупланмаһы тип ҡарауҙы абсурд тип һанай. Дарыуҙар терапияһын бөтөнләй инҡар итә. Төп дауа - кешенең үҙендә булған дауалаусы көс икәненә инана. Уларҙы арттырыусы һәм организмдың теләһә ниндәй тайпылышын бөтөрөүсе "мөғжизәле таяҡ" булып Ниши булдырған алты ҡағиҙә тора. Ул ике ҡағиҙәне һәм дүрт күнегеү комплексын үҙ эсенә ала.

***Беренсе ҡағиҙә - ятҡан урынығыҙ ҡаты булһын.*** "Әгәр сирегеҙ күп икән, умыртҡалыҡты дауалағыҙ", тип юҡҡа әйтмәй Кацудзо Ниши. Ул һәр ваҡыт кәүҙәне төҙ тотоу тураһында иҫкәрткән. Һәр саҡ үҙеңде контроллә: арҡаны һәм ҡулбаштарҙы тура, эсте тартылған килеш тоторға кәрәк. Әммә беҙ ғүмеребеҙҙең бер өлөшөн йоҡлап үткәрәбеҙ, шуға күрә был ваҡытты ял өсөн түгел, ә буй-һынды төҙәтеү өсөн дә файҙаланырға мөмкин. Тимәк, ятҡан урын-ер тигеҙ һәм ҡаты булырға тейеш.

***Икенсе ҡағиҙә - ҡаты яҫтыҡ.*** Ниши япон мәҡәлен иҫенә төшөрә: "Ҡыйшайған муйын - ҡыҫҡа ғүмер билдәһе". Ҙур һәм йомшаҡ мендәр муйындың умыртҡаларын яфаланырға мәжбүр итә, ә ҡаты яҫтыҡ уны нормаға килтерә, баш ауыртҡанда, танау-тамаҡ, күҙ ауырыуҙарында ярҙам итә, умыртҡалыҡты нығыта.

***Өсөнсө ҡағиҙә - "Алтын балыҡ" күнегеүе.*** Был күнегеүҙе, башҡалары кеүек үк, һәр көн иртән һәм кисен башҡарырға кәрәк. Ул буй-һынды, ҡан әйләнешен яҡшырта. Ҡаты тигеҙ ергә арҡағыҙ менән ятығыҙ, ҡулығыҙҙы баш осона һуҙығыҙ, аяҡ бармаҡтарын өҫкә тартығыҙ. Бер нисә тапҡыр сиратлап, етегә тиклем һанап, умыртҡа һөйәген тартығыҙ: тәүҙә уң аяҡ табанығыҙ менән иҙәндән алға шыуышығыҙ, ә ҡулдарығыҙ менән шул уҡ ваҡытта кирегә тартылығыҙ. Һуңынын шул уҡ күнегеүҙе һул аяғығыҙ менән эшләгеҙ. Артабан устарығыҙҙы муйын аҫтына һалып, аяҡ бармаҡтарын үҙегеҙгә тартығыҙ. Шул торошта балыҡ кеүек уңға-һулға (әммә өҫкә-аҫҡа түгел) 2 минут борғоланығыҙ.

***Дүртенсе ҡағиҙә - капиллярҙар өсөн тирбәлеш.*** Япон ғалимы кешеләрҙең күпселек сирҙәре нигеҙендә капиллярҙарҙың ауырыуы ята, тип

АСЫЛЫБЫҘ

# ДОНЪЯҒА ЯЛАНАЯҠ КИЛӘБЕҘ...



**Быйыл йәй отпускым ваҡытында ауылға ҡайтҡас, хәл-торошомда аңлатып булмаҫлыҡ һыҙланыуға оҡшаған уңайһыҙлыҡ тойғоһо кисерҙем. Тик мине нимә борсоғанын, ҡайһы ерем ауыртҡанын ғына белә алманым. Тегеләй-былай борғоландым да, был тойғонан ҡотола алмағас, бала саҡтағы һымаҡ, яланаяҡланып алып, Һаҡмар йылғаһы буйына төшөп киттем.**

Бала саҡта көноҙоно яланаяҡ йөрөһәк тә, "ыһ" та итмәй торғайныҡ. Табаныбыҙ осло нәмәгә баҫып ҡырҡылһа, ҡом ғына һибеп йә балсыҡ һылап дауалай инек. Ул сағында табандар ҡатҡылға әйләнеп, унда ҡата һымаҡ тире ҡатламы барлыҡҡа килеп, быялаға баҫып алһаҡ та, сытыйманыҡ. Әле килеп, йылға ярында һибелеп ятҡан тәүге таштарға баҫыу менән йән сығып китә яҙҙы. Һис юғы бер галуш ҡатып сығырға кәрәк булған да бит. Тик өйгә тиклем алыҫ, ә миңә шундай уҡ осло таштарға баҫып, баҫҡан һайын йән сығып китә яҙыуҙан эйелә-бөгөлә, һыу инеп сығырға ла кәрәк.

Ҡыҫҡаһы, күҙҙән осҡондар сәсрәтә-сәсрәтә, таштарҙы һәм ошо рәүешле сыҡҡан үҙемде әрләй-әрләй ике сәғәт самаһы йылға буйында йөрөп ҡайттым. Ҡайтҡас, ауыртыныуҙар менән донған аяҡтарымды өҫкә күтәреп ятып торҙом. "Ҡайһы ерең ауырта, йәнең шул ерҙә", тигәндәре дөрөҫ икән. Ысынлап та, был сәғәттәрҙә йәнемде табанымда итеп тойҙом.

Иң ҡыҙығы кискә табан башланды. Ҡыҙығы ла түгел, ә рәхәте. Әлеге лә баяғы, хәл-торошомдағы сәйер тойғоларым юҡҡа сығып, кинәт үҙемде яҡшы тоя һәм йырлағым килә башланы. Бәхетле бала сағымдың күңелле сәхифәләре, атай-әсәйемдең ҡуйынына һыйынып йәшәгән илаһи мәлдәрем уянды.

Интернетҡа инеп, "Кузнецов иппликаторы" менән аяҡ табанына һәм тәндең башҡа өлөштәренә энә массажы яһау тураһындағы күп һанлы мәғлүмәт менән танышҡас, үҙемдең ни сәбәпле кинәт ыңғай яҡҡа үҙгәреүемдең, кәйефем күтәрелеүенең сәбәптәрен аңланым. Кешенең аяҡ табанында уның организмының һәр бер функцияһын көйләү-йүнәтеү-нормаллаштыреүгә булышлыҡ итеүсе нөктәләре бар. Мин һыҙлана-һыҙлана Һаҡмар буйы таштарына баҫып йөрөгәндә шул нөктәләргә баҫып, үҙем дә белмәҫтән, үҙемде яҡшы тоя башлағанмын икән.

Йәй көнө күберәк яланаяҡ йөрөргә тырышығыҙ, дуҫтар. Һәр кемдең докторы уның үҙендә, тиҙәр. Беҙ тәбиғәт тарафынан үҙебеҙгә һалынған интеллектуаль көстөң - 3, физик көстөң 10 процентын ғына файҙаланабыҙ икән. Тимәк, 97 процент - интеллектуаль, 80 процент физик көсөбөҙ үҙебеҙ менән бергә теге донъяға китә. Быға юл ҡуймаҫ өсөн табандарыбыҙҙағы, тәнебеҙҙең башҡа өлөштәрендәге нөктәләргә баҫып, шул көстәрҙе үҙебеҙгә хеҙмәт иттереп, Хоҙай биргән ғүмерҙе һау килеш үткәрә алабыҙ. Бының өсөн беҙгә тәбиғәткә яҡыныраҡ булырға, күберәк яланаяҡ йөрөргә кәрәк. Беҙ бит был донъяға яланғас, яланаяҡ көйө тыуабыҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

һанаған. Тамырҙарҙан иң элек капиллярҙар бысрай башлай. Тимәк, ҡан тәндең һәр күҙәнәгенә барып етә алмай. Капиллярҙарға шундай ауыр эштәрендә нисек ярҙам итергә? Тирбәлдерергә! Иртән һәм кисен! Тирбәлеү ҡулдарҙа һәм аяҡтарҙа, тотош организмда ҡан әйләнешен яҡшырта. Арҡағыҙға ятығыҙ, муйынығыҙҙың аҫтына валик һалығыҙ, ҡулдарығыҙҙы һәм аяҡтарығыҙҙы өҫкә күтәрегеҙ, табандарығыҙ иҙәнгә параллель булһын. 1-3 минут самаһы ҡулдарығыҙҙы һәм аяҡтарығыҙҙы һелкетегеҙ.

***Бишенсе күнегеү - "Устарҙы һәм табандарҙы бер-береһенә терәү".*** Был күнегеү туҡымаларҙың ҡан әйләнешен, мускулдарҙың һәм нервыларҙың, эске ағзаларҙың эшмәкәрлеген яҡшырта. Кацудзо Ниши, уны көн һайын 4 минут башҡарыу ауырлы ҡатындарҙың бала табыу процесын еңеллләштерә, тип яҙа. Уның шундай ике пациенты була: береһенә таз һөйәге тар булғанлыҡтан, операция билдәләйҙәр, икенсеһенең балаһы арҡыры ята. Һеҙөмтәлә ике ҡатын да хирургтар ҡатнашлығынан тыш бына тигән итеп бала таба.

***Әҙерләнеү өлөшө.*** Арҡағыҙға ятығыҙ, муйынығыҙ аҫтына валик һалығыҙ. Устарығыҙҙы һәм табандарығыҙҙы тоташтырығыҙ, тубыҡтарығыҙҙы ян-яҡҡа ебәрегеҙ. Бармаҡ остары менән бер-береһенә 10 тапҡыр баҫығыҙ. Артабан бармаҡ остары һәм усығыҙ менән 10 тапҡыр бер-береһенә баҫығыҙ. Устарығыҙҙы айырып, уларҙы баш артына ҡуйығыҙ һәм 10 тапҡыр арттан алға битегеҙ аша билегеҙгә тиклем һыпырығыҙ. Бармаҡтар баш яғына ҡарап торорға тейеш. Бармаҡтарығыҙҙы табандар яғына бороп, улар менән сандырҙан кендеккә тиклем 10 тапҡыр һыпырығыҙ. Устарығыҙҙы бергә ҡуйып, ҡулығыҙҙы алға һуҙығыҙ һәм 10 тапҡыр һауаны балта менән ҡырҡҡан кеүек һелтәгеҙ. Ҡулығыҙҙы 10 тапҡыр мөмкин тиклем бейеккәрәк һәм аҫҡараҡ һуҙырға тырышығыҙ. Устарығыҙҙы ашҡаҙан тирәһенә (солнечное сплетение) ҡуйып, бергә ҡуйылған табандарығыҙҙы 10 тапҡыр 1-1,5 табан оҙонлоғонда алға-артҡа хәрәкәтләндерегеҙ. Һуңынан 10-60 тапҡыр умыртҡа һөйәген һуҙырға тырышып, устарығыҙҙы һәм табандарығыҙҙы бер үк ваҡытта хәрәкәтләндерегеҙ.

***Төп өлөш.*** Табандарығыҙҙы һәм устарығыҙҙы айырмайынса күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ ҙа, ошо позала 10-15 минут ҡалығыҙ. Ҡул бармаҡтарығыҙ түбәгә ҡарап торорға тейеш.

***Алтынсы ҡағиҙә - арҡа һәм эс өсөн күнегеү.*** Кацудзо Нишиҙың Сәләмәтлек системаһының алтынсы ҡағиҙәһендә арҡа һәм эстең хәрәкәте үҙ-үҙеңә инандырыу менән бергә бара. Күнегеү симпатик һәм парасимпатик нервылар системаларының эшмәкәрлеген, организмдың кислота-һелте балансын тергеҙә һәм сәләмәтлеккә көйләй. Тубыҡланып ултырығыҙ, тазығыҙ үксәләрегеҙгә, табанығыҙға тейеп торһон. Тигеҙлекте ҡоймос һөйәгендә тотоп, умыртҡалыҡты турайтығыҙ.

***Ара күнегеүе.*** Уны һәр алты әҙерлек күнегеүенән һуң һәр яҡҡа берәр тапҡыр эшләгеҙ. Ҡулдарығыҙҙы күкрәк тураһында алға һуҙығыҙ. Башығыҙҙы һулға бороғоҙ, ҡулбаш аша ҡоймосоғоҙҙо күрергә тырышығыҙ. Ҡоймос тәңгәлендә апельсин ҙурлығында янып торған алтын шарҙы күҙаллағыҙ һәм уны яйлап ҡына арҡағыҙ буйлап өҫкә күтәрегеҙ, умыртҡалыҡтың һәр умыртҡаһы менән уның ағымлы, шифалы ҡағылыуын тойорға тырышығыҙ. Башығыҙҙы элекке торошона ҡайтарығыҙ һәм шул уҡ күнегеүҙе икенсе яҡҡа эшләгеҙ. Һуңынан ҡулдарығыҙҙы баш өҫтөнә күтәрегеҙ ҙә, шул уҡ күнегеүҙе тиҙ генә яңынан ҡабатлағыҙ.

***Әҙерлек күнегеүе.*** Ҡулбаштарығыҙҙы 10 тапҡыр күтәреп төшөрөгөҙ. Башығыҙҙы 10 тапҡыр уңға һәм һулға һалығыҙ. Артабан 10 тапҡыр алға эйегеҙ һәм артҡа ташлағыҙ. Башығыҙҙы артҡа, уң яҡ ҡулбашығыҙға - 10, артҡа, һул яҡ ҡулбашығыҙға 10 тапҡыр һалығыҙ. Башығыҙҙы уңға эйегеҙ, һуңынан яйлап ҡына артҡа, умыртҡалыҡҡа табан әйләндерегеҙ. Икенсе яҡҡа ҡабатлағыҙ. Һәр ҡулбашҡа 10-ар тапҡыр ҡабатлағыҙ. Ҡулығыҙҙы терһәктән тура мөйөш итеп бөгөгөҙ, уларҙы ситкә айырып, йоҙроҡтарығыҙҙы төйнәгеҙ. Эйәгегеҙ түбәгә ҡарап торғанға тиклем башығыҙҙы артҡа ташлағыҙ. Етегә тиклем һанап, терһәктәрегеҙҙе артҡа ебәрегеҙ һәм уларҙы арҡағыҙҙа тоташтырырға тырышығыҙ. Эйәгегеҙҙе түбәгә һуҙығыҙ. Был күнегеүҙе 10 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

***Төп күнегеү.*** Бер үк ваҡытта эсегеҙ менән алға-артҡа хәрәкәтләнеп, 10 минут уңға-һулға сайҡалығыҙ. Күнегеүҙе эшләгәндә эстән генә: "Миңә һәйбәт, һәм көндән-көн яҡшыраҡ буласаҡ. Организмымдың һәр күҙәнәге яңыра. Ҡаным сафлана, таҙара, сәләмәтләнә. Тирем, тамырҙарым һығылмалыға, ныҡлыға әйләнә, һөйәктәрем - нығый, быуындарым - һығылмалана. Барлыҡ системалар һәм ағзалар яҡшы эшләй. Мин сәләмәтерәк, аҡыллыраҡ, изгелеклерәк, үҙемә һәм кешеләргә файҙалыраҡ була барам. Миңә яҡшы һәм көндән-көн яҡшыраҡ буласаҡ", - тип ҡабатлағыҙ. Кацудзо Ниши күнегеүҙәрҙе самурайҙарҙың яратҡан хәҡиҡәтенә һылтанып, бөгөндән башларға кәңәш итә: "Бөгөн һәм иртәгә юҡ. Беҙ бары тик әлеге ваҡытта нимә бар, шуға эйә".

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**әҙерләнә.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

## НӘФСЕ

29. Ҡайһы саҡ нәфсе Аллаһы Тәғәләгә һыйыныуҙан да үҙенә ләззәт таба. Нәфсе был саҡта үҙенә файҙа күреүҙе лә маҡсат итеп ҡуя. "Әгәр ҙә нәфсең һинә Аллаһы Тәғәләгә һыйын, тип әйтә икән, ул һинең үҙеңә ҡаршы ниндәйҙер этлек уйлай", тип әйтелә изге китапта.

30. Нәфсе һәр бер дәғүәсеңә ҡарағанда ла дошманыраҡ. "Нәфсең дошманыңа ҡарағанда күпкә ҡурҡыныраҡ, сөнки ул һинең эсеңдә, күңелеңдә ултыра", тигән Мөхәммәт Бәйғәмбәр.

31. Нәфсе ҡайһы саҡта һыуыҡтан ҡатып ҡалған аждаһа кеүек мәүеш була.

32. Әҙәм балаһы өсөн нәфсеһенән ҡотолоуҙан да ауырыраҡ ғәмәл юҡ.

33."Шәхси мәнфәғәтте ҡайғыртыуға ҡоролған һәр бер ғәмәл нәфсе күрһәтмәһе буйынса башҡарыла. Нәфсе кешеләрҙе ымһындыра, алдай, һәм ымһынған һәм алданғандар башҡаларға ла ымһындырып һәм алдап, нәфсегә хеҙмәт итә", тигән Әбү Бәкер Үәсити.

34. Нәфсе интеллектты һалҡын баҙға ултыртырға ла һәләтле. Был саҡта нәфсе йөрәккә һәм рухҡа буйһона. "Минең Иблис мосолманға әүерелде", тигән бәйғәмбәр.

35.Нәфсе төштәргә йылан, эт, бүре, ҡомаҡ, маймыл, ишәк һәм албаҫты образдарында инә. Әгәр ҙә нәфсеңең төп билдәһе хаяһыҙлыҡ һәм мәрхәмәтһеҙлек булһа, ул - йылан, ялған һәм әшәкелек булһа - төлкө һәм албаҫты, уҫаллыҡ һәм нәфрәт булһа - эт һәм бүре, һаранлыҡ булһа - ҡомаҡ, аҙғын һәм еңел кәйеф булһа - маймыл, айыу һәм ишәк образдары күренеүе бар. Ә инде кешелә үҙ-үҙен сикһеҙ яратыу һәм эгоизм тойғолары сиктән тыш көслө булһа - кеше төшөндә үҙ-үҙен күрә.

35. Ябай кешеләр - ул матди донъяның баш күтәреүе, батшалар - нәфсенең, философтар - интеллекттың, ә Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге дуҫтары һәм бәйғәмбәрҙәре - Аллаһы Тәғәләнең баш күтәреүе.

36. Теләктәр ҙә, интеллект та нәфсенең иғтибар үҙәгендә. Әгәр ҙә кешелә интеллект өҫтөнлөк итһә, рухи үҫешкә юл асыла, киреһенсә булған осраҡта кеше хайуанға әүерелә башлай. "Интеллект менән теләктәр бер-береһенә һәр саҡ дәғүә белдереп тора. Рухи үҫеш - ул интеллекттың хеҙмәтсеһе, рухи унышһыҙлыҡ - теләктәр хеҙмәтсеһе. Нәфсе уларҙың уртаһында урынлашҡан һәм ҡайһы яҡ өҫтөнлөк итһә, шуға хеҙмәт итә", тигән Али ибн Сахл Исфахани.

Нәфсе йөрәктең алға китешенә ҡамасаулай. Нәфсенең теләктәре бихисап. Улар асылда ике төркөмгә бүленә:

- киңәнес эҙләүсе теләктәр;
- үҙ-үҙеңде сикһеҙ яратыуға һәм хакимлыҡҡа ынтылыуға булышлыҡ итеүсе теләктәр.

Тәүгеләре менән ҡоралланғандары кешеләргә лә, йәмғиәткә лә әллә ни ҡурҡыныс тыуҙырмай. Икенселәре иһә, ысынлап та, кешелек өсөн бик ҙур ҡурҡыныс тыуҙырыусылар. Әммә ике төркөмгә ҡараусылар ҙа, тормошта нимәгә генә ирешеүҙәренә ҡарамаҫтан, улар Аллаһы Тәғәләнән бик алыҫ торалар. Ә инде һәр төрлө теләктәрҙән, йәғни нәфсеһенән ҡотола алыусылар, хатта боттарға табыныусылар ҡорамында булыуҙарына ҡарамаҫтан, Аллаһы Тәғәләгә яҡын торалар.

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Өсөнсө сер: үҙеңде ҡабул итеү сәнғәте

Үҙеңдең мөһимлегеңде таныу - үҙ-үҙеңә ышаныу формалашыуҙағы тағы бер хәл иткес фактор. Күптән иҫбатланған: үҙегеҙ үйлағандан яҡшыраҡ булып булмай, йәғни үҙегеҙгә ниндәй мөнәсәбәттәһегеҙ - шундайһығыҙ. Был хистәр төпкә аңға бала саҡтан уҡ һалына.

Ыңғай үҙбаһа - һәләттәрҙе йәки ҡаҙаныштарҙы һалҡын аҡыл менән ҡабул итеү түгел. Был - үҙең менән шәхсән килешеү ул. Ыңғай үҙбаһа бер нисек тә эгоизм сағылышы була алмай. Һеҙ үҙегеҙҙә эгоцентрист кеүек ғашиҡ түгелһегеҙ. Бары тик үҙегеҙҙең үҙенсәлегегеҙҙе һәм баһағыҙҙы таныйһығыҙ, тирә-яҡтағыларға ҡаҙаныштарығыҙ йәки матди етешлегегеҙ аша фекер тыуҙырырға тырышмайһығыҙ. Ә инде маҡтанырға һәм ҡыланырға тырышыусылар түбән үҙбаһаның классик өлгөһөн күрһәтә.

Тәү ҡарашҡа, күптәр ыңғай йәки юғары үҙбаһаға эйә кеүек күренә. Ғәмәлдә, был һәр ваҡытта ла улай түгел. Беҙҙең замандың иң ҙур фажиғәләренең береһе, кешелек үҫешенә ҙур өлөш индереүсе күпселек лидерҙар, бөйөк уҡытыусылар, уйлап табыусылар, рәссамдар түбән үҙбаһа ҡорбандары була. Һоҡланыуға лайыҡ тарихи фигураларҙың ҡайһы берҙәре наркотиктарға, алкоголгә ылыға, үҙҙәре ҡабул итә алмаған, ҡайһы ваҡытта күрә алмаған "мин"енән ҡотолор өсөн хатта үҙ-үҙенә ҡул һала.

Ыңғай үҙбаһа формалаштырыуға бәхетле булыу ғына йоғонто яһамай. Ул һеҙҙең тормошоғоҙ күтәреләсәк нигеҙ. Әгәр үҙегеҙ күҙаллаған тормошҡа килергә хыялланһағыҙ, был мәсьәләгә етди ҡарарға тейешһегеҙ. Кире осраҡта, үҙбаһағыҙ ологайған һайын түбәнәйәсәк, һәм һеҙ бәхетһеҙ йәки үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләүсе кешеләр араһында буласаҡһығыҙ.

Юғары үҙбаһа булдырыу өсөн түбән үҙбаһаның нисек формалашыуын һәм кеше алдында уның нисек сағылыуын табыуын аңларға кәрәк.

### Баштан башлайыҡ

Түбән үҙбаһаның өс төп сәбәбе бар. Беренсеһе - ата-әсәләрҙән алған еңелеү инаныуы, күҙаллауы һәм ҡиммәттәре. Икенсеһе - мәктәп йылдарында уҡытыусылар көсләп һендерергә тырышҡан ялған һәм алдаҡ атамаларҙан алып, профессиональ яраҡлылыҡҡа үткәрелгән төрлө тестар һәм IQ тестарына һынау үткәндәге әрләнеү һәм тәнҡитләнеү тупланмаһы. Өсөнсө сәбәп ғәйеплелек һәм лайыҡһыҙлыҡҡа баҫым яһау менән дини тәрбиәне берләштерә. Түбән үҙбаһа формалаштырыуға ярҙам итеүсе факторҙар күп булыуға ҡарамаҫтан, был өсәү - иң мөһимдәре. Артабан шуларҙың беренсеһе менән танышырбыҙ.

Ата-әсәләрҙең түбән үҙбаһаһы беҙҙең үҙбаһаны булдырыуҙа төп урында тора. Күпселек осраҡта был әсәйҙәргә ҡағыла, сөнки улар менән беҙ ғүмеребеҙҙең ныҡ хисле мәлен үткәрәбеҙ. Улар ялған инаныуҙарға, күҙаллауҙарға һәм ҡиммәттәргә ярашлы йәшәгәнлектән, улар, йоғошло ауырыу кеүек, мөнәсәбәттәр, ғәмәлдәр һәм йоғонто аша балаларға ла күсә. Әгәр ата-әсә үҙен адекват тоймаһа йәки кәм күрһә, балалар ҙа үҙҙәрен шулай тоя һәм, һөҙөмтәлә, хатта өйҙә булһынмы йәки мәктәптәме, иң ябай тормош мәсьәләләрен дә хәл итә алмай. Йәғни ата-әсәләрҙең ялған күҙаллауҙары балаларҙың тормошонда "факт"ҡа әйләнә. Ни өсөн шулай һуң?

**(Дауамы бар).**

БАШ ҠАЛАБЫҘ ӨФӨНӨҢ
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘГЕ АҘНАЛЫҠ БАҪМАҺЫ

# КискеӨфө

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫРҒА 13 СӘБӘП

**БЕРЕНСЕ СӘБӘП** — **МӘҒЛҮМӘТ**
"Мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә" тигән хәҡиҡәтте күҙҙә тотоп, бар өлкәлә — заман ағышында, сәйәсәттә, иҡтисадта, социаль һәм мәҙәни өлкәлә мәғлүмәтлелектә артта ҡалмаҫ өсөн.

**ИКЕНСЕ СӘБӘП** — **БЕЛЕМ**
Бөгөн донъяны белем дилбегәһен ҡулда тотҡандар алға әйҙәй. Ә "Киске Өфө"- мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, ә ғилем һәм мәғрифәт сығанағы ла.

**ӨСӨНСӨ СӘБӘП** — **АҠЫЛ**
Аҡыллы булыр өсөн. Был баҫмала мотлаҡ донъяуи аҡыл тәжрибәһенә, ата-бабалар аҡылына юлығырһығыҙ.

**ДҮРТЕНСЕ СӘБӘП** — **ТЕЛ**
Дөрөҫ һөйләшер өсөн. Баҫма туған телебеҙҙең һутын, матурлығын һүрәтләп кенә ҡалмай, ә күңелгә яҡынайта, уны баһаларға һәм һанларға өйрәтә.

**БИШЕНСЕ СӘБӘП** — **УЙ**
Дөрөҫ уйлау өсөн. Уйҙарыңда сүп-сар күп булған һайын, һинең тормошоң артҡа китә, сиргә һабыша бараһың. Ә дөрөҫ уйларға өйрәнеү һине рухи яҡтан да, физик яҡтан да сәләмәтләндерә. Ошо хаҡта иҫкәртә "Киске Өфө".

**АЛТЫНСЫ СӘБӘП** — **УҢЫШ**
Уңышлы кеше булыр өсөн."Уңыш ҡаҙан" рубрикаһында донъя кимәлендәге иң уңышлы кешеләрҙең тәжрибәһе күптәргә дөрөҫ юл табырға ярҙам итә. Юғары ҡаҙаныштар яулаған яҡташтар, милләттәштәр тормошо ла уңышҡа әйҙәүсе маяҡ итеп сағылдырыла.

**ЕТЕНСЕ СӘБӘП** — **ТАРИХ**
Тарихи тамырҙарыңды ныҡыраҡ белер өсөн. Атын-затын, шәжәрәһен белмәгән кеше тамырһыҙ ағас һымаҡ, ил-йортоноң тарихын белмәгәндәр ҡараңғы урман эсендә аҙашҡан әҙәмгә бәрәбәр.

**ҺИГЕҘЕНСЕ СӘБӘП** — **МИЛЛӘТ**
Үҙеңдең ниндәй милләт вәкиле икәнеңде танып, күңелеңде ғорурлыҡ тойғоһо менән тултырыу өсөн.

**ТУҒЫҘЫНСЫ СӘБӘП** — **СӘМ**
Сәмләнер өсөн. Сәмләнергә ерлек булғанда, кеше тау емерер көскә эйә була.

**УНЫНСЫ СӘБӘП** — **СӘЛӘМӘТЛЕК**
Сәләмәт йәшәү рәүешенә ылығыр өсөн. Баҫмала сәләмәтлеккә илтеүсе бик күп юлдар барлана, әйҙәй, ышандыра.

**УН БЕРЕНСЕ СӘБӘП** — **КӨС**
Заман елдәренә бирешмәҫ, уға ҡаршы торор көс, ысул табыр өсөн.

**УН ИКЕНСЕ СӘБӘП** — **АЛЛАҺ**
Хоҙайға яҡынайыу ысулына төшөнөү, йәғни динебеҙ тураһындағы хәҡиҡәткә күңелебеҙҙе асыу өсөн.

**УН ӨСӨНСӨ СӘБӘП** — **ЯУАП**
Үҙеңде борсоған бөтөн һорауҙарыңа яуап табыу өсөн.

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙҘАР:



ӨФӨЛӘ, РЕСПУБЛИКАНЫҢ БӨТӨН РАЙОНДАРЫНДА ҺӘМ ҠАЛАЛАРЫНДА...



БАЛАЛАР...



ЙӘШТӘР...



ОЛОЛАР...

ҺИН ДӘ ЯҘЫЛ ҺӘМ УҠЫ!

ШЫЛТЫРАТ:
**246-03-23**

450005, БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ, ӨФӨ ҠАЛАҺЫ, РЕВОЛЮЦИОН УРАМЫ, 167/1

**www.kiskeufa.ru**

ИНДЕКС:
**50665***

*ПОЧТА БҮЛЕКСӘҺЕНДӘ ЯҘЫЛЫУ ӨСӨН

✓ *Санкт-Петербургтың "СКА"һы менән осрашыу көсөргәнешле булды. Төп уйын ваҡытында еңеүсе билдәләнмәне. Овертаймға күскән матчта юлаевсы Энвир Лисиндың шайбаһы иҫәпте 2:1 еткереп, Өфө командаһына еңеү килтерҙе.*



ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

# УҠСЫҒА КӨРСӨК ТЕЙМӘҪ,

## балыҡтар яҡлаулы булыр

**Маймыл йылы тормошобоҙға ыңғай үҙгәрештәр, үҫеш өсөн күп мөмкинлектәр вәғәҙәләй, тип юрай астрологтар. Ә, ғөмүмән, маймыл ағас стихияһына ҡарағанлыҡтан, уға тиҙлек, хәрәкәтсәнлек, тиҙ үҙгәреүсән холоҡ та хас. Тимәк, кешелек донъяһы үҫештең төрлө юлдарын әҙләү өҫтөндә буласаҡ. Шуға ла йәшәйешебеҙҙәге киҫкен үҙгәрештәргә әҙер булып, тышҡы мөхит шарттарына яраҡлаша белергә өйрәнә тороу бер кемгә лә ҡамасауламаҫ.**



**Ҡуҙылар** аҙмышының киҫкен бороллоштары артта ҡалды һәм 2016 йылда улар тыныс ҡына көндәлек эштәр менән мәшғүл булыр. Һеҙ етди һынауҙар аша үттегеҙ, әле шуның һөҙөмтәләрен барлайһығыҙ, тәжрибәгеҙҙе, киләсәккә ниәттәрегеҙҙе анализлайһығыҙ. Ә шулай ҙа ғаҙәтегеҙгә ингән киҫкенлек эштә лә, өйҙә лә һаҡланып ҡала әле. Үҙегеҙҙе ҡыйыу, ышаныслы тотоғоҙ, ләкин агрессияны онотоғоҙ - шул саҡ һеҙгә һәр саҡ уңыш юлдаш булыр.

**Буғаларҙы** ҡыуаныслы, ҡыҙыҡлы һәм ижади йыл көтә. Һеҙ үҙегеҙҙең быға тиклем күренеп бармаған таланттарығыҙҙы асырһығыҙ. Ә был һеҙҙең абруйҙы күтәрергә генә түгел, хеҙмәт баҫҡысынан күтәрелергә лә ярҙам итер. Сәләмәтлегегеҙгә иғтибар итегеҙ, был йәһәттән бер аҙ проблемалар булып алыр. Яңы йылда шәхси тормошоғоҙ ҙа һынауҙар аланына әйләнмәксе, ләкин был балаларығыҙ менән мөнәсәбәттәргә ҡағылмай.

**Игеҙәктәргә** 2016 йылда үҙ таланттарын һәм һәләттәрен бойомға ашырыуы еңелдән булмаҫҡа оҡшай, уның ҡарауы, ғаиләле булып, донъяғыҙҙы ҡороп, ышаныслы тыл булдырырһығыҙ. Әле иң мөһиме ошо. Бынан тыш, ҡыҙыҡлы танышлыҡтар, рухташ яҡын дуҫтарығыҙ барлыҡҡа килер. Йыл аҙағына ыңғайға көйләнеш көсәйер, ижади мөмкинлектәрегеҙ әүҙемләшер һәм һеҙҙең алда яңы мөмкинлектәр асылыр.

**Ҡыҫала** өсөн йыл тигеҙ көйләнештә, артыҡ көсөргәнешһеҙ үтер, әгәр ҙә тәүге ярты йыллыҡта матди йәки күсемһеҙ милек менән бәйле мәсьәләләргә етди мөнәсәбәттә булһағыҙ. Шөбһәләнмәгеҙ: талаптарығыҙ һәм ихтыяждарығыҙ һәр саҡ һеҙ теләгәнсә килеп сыҡмаған хәлдә лә, Юғары аң кимәленән ҡарағанда, һеҙҙең эштәрегеҙ һәйбәт. Өйҙә ултырыу ялҡытасаҡ, сәйәхәттәргә әҙерләнегеҙ, күңелегеҙ ятҡан эштәр менән шөғөлләнегеҙ. Сағыу, тәьҫоратлы мәлдәргә аяҡ баҫаһығыҙ.

**Арыҫлан** көндәлек ғәҙәти эштәр менән мәшғүл булыр. Матди хәлегеҙҙе нығытып алыу, аҡса эшләү йәйы тыуыр. Үҙегеҙҙең нимәгә һәләтле булыуығыҙҙы бөтәһенә лә иҫбатланығыҙ инде, әле "өйөр"ҙән айырылып тормай, баҫалҡыраҡ булыуығыҙ кәрәк. Шуға өлгәшһәгеҙ, бөтөн кәрәк нәмә һеҙгә үҙе килер, йөмғиәттә күрмәклеле булырһығыҙ, бәҫегеҙ артыр.

**Ҡыҙҙар** өсөн ысын мәғәнәһендә хәл иткес, мөһим йыл килә. Башҡалар ихтыярынан ҡотолоп, ниһайәт, үҙегеҙ күптән уйлаған һәм теләгән йүнәлешкә табан йөҙ бороғоҙ. Кешеләргә - йоғонтоғоҙ, йәмғиәттә абруйығыҙ артыр. Ҡайһы бер ҡатмарлыҡтар килеп тыуһа ла (тормошта унһыҙ булмай), быйыл һеҙ артабанғы аҙмышығыҙҙа мөһим буласаҡ күп нәмәләргә өлгәшә алырһығыҙ. Шуға күрә тамырынан үҙгәрештәргә ынтылығыҙ: һеҙҙең мөҙҙәт етте.

**Үлсәүҙәрҙән** ваҡыт түҙемлек һәм ныҡлыҡ талап итәсәк һәм был һеҙҙең ҡулдан килә, шул арҡала йыл ахырында үҙегеҙҙе еңеүсе итеп тойорһоғоҙ. Был осорҙо яңы ҡаҙаныштарға әҙерлек тип ҡабул итә алаһығыҙ. Башҡаларҙан айырылып күренергә тырышмағыҙ, әлегә күләгәлә булыуығыҙ хәйерле, тик тирә-йүндә ниҙәр барыуын диҡҡәт менән күҙәтегеҙ. Мөһим ҡарарҙарығыҙҙы көҙгә ҡалдырығыҙ, шул саҡ кәрәкмәгән икеләнеүҙәр һәм ҡаршылыҡтарҙан азат булырһығыҙ.

**Саяндар** өсөн йыл ҡыҙыҡлы булмаҡсы, шуға күрә иҫкергән һәм үҙегеҙгә үҫешергә ҡамасаулаған бөтөн нәмәнән ҡотолоу яйын ҡарағыҙ. Дөрөҫ, көрсөктәр ҙә булып алыр, тап улар ярҙамында үҫәбеҙ һәм үҙгәрәбеҙ бит. Икенсе ярты йыллыҡта күңелегеҙҙең "ҡараңғы" яҡтарын "таҙарта" бағышлағыҙ, иртәме, һуңмы, йәшерен серҙәрҙең фашланыуы ихтимал. Һеҙҙең бурыс - айыҡ аҡыллыҡ һаҡлап, ямanлыҡ "аяғын" киҫә белеүҙә.

**Уҡсыларға,** әйтерһең дә, глобаль көрсөк тигән нәмәнең һис бер ҡағылышы юҡ - улар өсөн йыл бик уңышлы буласаҡ. Был айырыуса уның һөнәре буйынса эшмәкәрлегендә һәм карьера үҫешендә сағылыр. Шуға ла оҙаҡ уйлап та тормайынса, хәлде "мөғәҙәнән" алып, иң ымһындырғыс урын өсөн дәғүәләшергә була. Иғтибарығыҙҙы үҙегеҙ өсөн иң мөһим тип иҫәпләгән өлкәгә туплағыҙ. Бөтөн маҡсаттарығыҙҙы ла барлап сыҡҡандан һуң иң мөһимдәрен генә ҡалдырығыҙ. Мөхәббәт өлкәһендә һеҙгә борсолорға сәбәптәр юҡ, гармония һиллегенән ләззәт алығыҙ.

**Ылаҡ** (Кәзәмөгөҙ) өсөн йыл белем алыу, рухи үҫеш һәм сәйәхәттәргә бәйле бик ҡыҙыҡлы һәм уңышлы булыр, тип вәғәҙәләй йондоҙҙар.Үҙ ҡарашығыҙға яҡын булған идеалдар һәм хазиналар системаһы булдырығыҙ. Тап ана шулар һеҙҙең артабанғы эштәрегеҙҙә статусығыҙҙы нығытыуға булышлыҡ итәсәк тә. Һәр ваҡиғаға, дәртле, ныҡышмал булырһығыҙ, тик ҡайһы саҡтарҙа хис-тойғоға бирелеп алырһығыҙ.

**Һыуҡойорҙарға** яңы йыл ҡыҙыҡлы һәм көтөлмәгән ваҡиғалар бүләк итәсәк. Тотороҡлолоҡ һәм тынлыҡҡа йәбешеп ятмағыҙ: һеҙҙең өсөн мөһим үҙгәрештәр башлана, бынан ҡурҡырға кәрәкмәй. Карьера, аҡса, шәхси тормош һәм башҡа шундай "ерҙәге" мәсьәләләр икенсе планға күсер. Һеҙҙең бурыс - йәшәү менән үлем, үткән менән киләсәк серҙәрен төшөнөүҙә; күңел төпкөлөнән ҡурҡыуҙарҙы, икеләнеүҙәрҙе алып ташлап, еңеүсе булып сығырға!

**Балыҡтар** тормошонда мөһим һәм ҡыҙыҡлы мәлдәр башлана. Әлеге ваҡытта һеҙ шәхес үҫеше осорон кисерәһегеҙ. Киләсәгегеҙ уны нисек үтеүегеҙгә ҡарап билдәләнәсәк. Ауырлыҡтар алдында баҙап ҡалмағыҙ. Һеҙ яңғыҙ түгел, һеҙҙе бер кем дә ташламаған, һеҙгә ярҙам һәм яҡлау юғарынан килә. Мөһим хәл-ваҡиғалар шәхси мөнәсәбәттәр өлкәһендә барасаҡ. Һеҙ бының йоғонтоһон тормошҡа ҡарашығыҙ үҫешендә лә тойорһоғоҙ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (1) дүшәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 12 (2) шишәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:42 | 17:12 | 18:42 |
| 13 (3) шаршамбы | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |
| 14 (4) кесе йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 15 (5) йома | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:47 | 17:17 | 18:47 |
| 16 (6) шәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 17 (7) йәкшәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

# ЛАЙЫҠЛЫ ТАМАМЛАНЫЛАР



**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы 2015 йылды лайыҡлы тамамланы. Декабрҙең һуңғы ике аҙнаһында юлаевсылар Өфөлә 4 матч уҙғарҙы һәм уларҙың өсөһөндә еңеү яуланы.**

Ике осрашыуҙа Игорь Захаркин уйынсылары Мәскәү ҡунаҡтары менән көс һынашты. "Динамо" хоккейсыларын хужалар 2:0 иҫәбе менән ҡыйратты, ә "Спартак" менән алышта иһә ҡунаҡтар уңышлыраҡ булып сыҡты. Уйын һөҙөмтәһе - 1:2.

Санкт-Петербургтың "СКА"һы менән осрашыу көсөргәнешле булды. Төп уйын ваҡытында еңеүсе билдәләнмәне. Овертаймға күскән матчта юлаевсы Энвир Лисиндың шайбаһы иҫәпте 2:1 еткереп, Өфө командаһына еңеү килтерҙе.

Мәскәү өлкәһе ҡунаҡтары "Витязь" менән уйында "Салауат Юлаев", үҙ файҙаһына, ҡоро иҫәп менән тамамланы. Беренсе минуттарҙан уҡ уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алған юлаевсылар һуңғы минуттарға тиклем әүҙемлектәрен юғалтманы. Матч иҫәбе 3:0.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 ғинуар ПРЕМЬЕРА "Йософ һәм Зөләйха"** (Кол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**10 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**14 ғинуар "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.)

**15 ғинуар "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 января "Приключения обезьянки Бьянки"**, сказка для детей. Начало 13.00, 15.00

**10 ғинуар "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00, 15.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 ғинуар "Ғәлиәбануу"** (М. Фәйзи), музыкаль драма

**15 ғинуар "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия

АФАРИН!

# СЕЛТӘРЛЕ БУЛЫУ ХЫЯЛЫ...

## ағинәйҙәрҙе Өфөгә йыйҙы

**Күптән түгел Сибай ҡалаһының Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, сәсәниә Асия Ғәйнуллина етәкселегендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары Өфөлә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәү әйбере - селтәр ( һаҡал, күкрәксә, хәситә, арҡыры яға ла тиҙәр) эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Был сара Республика халыҡ ижады үҙәге эргәһендәге Сәсәндәр мәктәбе һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы менән берлектә ойошторолдо һәм Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йөҙҙән ашыу ағинәйҙе йыйҙы.**



Былтыр II "Селтәр" башҡорт сәхнә костюмы республика күргәҙмә-конкурсы үткәрелгәндә үк халыҡ ижады өйрәнеүсе белгестәр ҡатнашыусылар араһында бөтөнләй яңылыш тегелгән селтәр өлгөләрен күреп, борсолоуын белдергәйне. Сөнки ҡайһы бер ижади төркөмдәр ялтырауыҡлы ептәр, ҙур муйынсаҡтар ярҙамында төрлө биҙәктәр һалып эшләгән өлгөләрен "селтәр" тип конкурсҡа тәҡдим итте. Улар араһында ете тажлы ҡурай, Башҡортостандың флагын төшөрөп ҡуйыусылар ҙа булды. Ул саҡта хәлде төҙәтеү өсөн берәй сара күрергә кәрәк, тигән ниәт яралһа, ниһайәт, быйыл уны тормошҡа ашырыу юлы ла табылды. Республика халыҡ ижады үҙәге эргәһендә Сәсәндәр мәктәбе асылыуы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эше йөнләнеүе быға булышлыҡ итте. Республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған йөҙҙән ашыу ағинәйгә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеменең бөтә нескәлектәрен белгән Сибай ҡалаһы ағинәйҙәре үҙ оҫталыҡтарын өйрәтте. Улар оҫталыҡ дәресендә ҡатнашыусылар өсөн селтәрҙең нигеҙен тәшкил иткән тауарҙы бесеп тегеп, уға кәрәк тиклем ҡыҙыл мәрйен, ҡортбаш һәм хатта энәһен-ебен дә ҡушып һалып әҙерләп килтергәйне. Был эште енелләштереү һәм һөҙөмтәле итте. Өлгө өсөн сибайҙар үҙҙәре эшләгән селтәр, хәситә, арҡыры яғаларҙың күргәҙмәһе лә ойошторолдо. Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы бинаның ҙур залында түңәрәкләп теҙелгән өҫтәлдәр артына шау-гөр килеп урынлашып бөткән ҡатын-ҡыҙҙарға Асия Ғәйнуллина селтәрҙәргә һалынған мәрйен биҙәктәренең мәғәнәһе, ниндәй әһәмиәткә эйә булыуы тураһында һөйләгәндән һуң, йым ғына итеп мәрйен теҙеү серҙәренә төшөндөрҙө.

- Селтәрҙәге һәр биҙәккә тәрән мәғәнә һалынған, улар кеше күҙенән генә түгел, насар көстәрҙән дә һаҡлаған, - тип башланы һүҙен Асия Солтан ҡыҙы. - Боронғо биҙәктәрҙә башҡорт халҡының мөһөрө, бетеүе мотлаҡ төшөрөлә. Мөһөр - түңәрәк, ә бетеүҙәр өсмөйөш, ромб формаһында була. Мөһөрҙөң уртаһына ҡортбаш, аҡыҡ, ысын мәрйен, ай ташы ҡуйырға мөмкин. Мөһөр эсенә бетеү эшләп, уның уртаһына ошо таштарҙың береһен ҡуйһағыҙ, донъяғыҙҙың дүрт яғына ла ҡот ҡуныр. Селтәрҙә мәрйендәрҙең сәнселеп төшөүе Ҡояш нурын һынландыра - был ҡатын-ҡыҙ, һуҙылып төшкәне - Ай нуры, уның осонда орлоғо була, был ир-егеттең нуры. Ир-егеттең орлоҡло нурына ҡатын-ҡыҙҙың таралып төшкән нуры ҡушылып, орлоҡтан шытымдар сыға. Бына ниндәй тәрән фәлсәфә һалынған беҙҙең милли кейемебеҙҙең һәр биҙәгенә. Селтәрҙең башына өс, дүрт, биш йәки ете ҡортбаш ҡуйыла һәм улар ике яҡтан да тәңкә менән уратылырға тейеш. Селтәр эшләгәндә боронғо өлгөләргә ҡарап эшләү кәрәк, сөнки бына ошондай беҙ белеп бөтмәгән йәшерен мәғәнәләрҙе һаҡлау һәм киләсәк быуынға түкмәй-сәсмәй тапшырып ҡалдырыу мөһим...

Оҫталыҡ дәресенә килеүселәрҙең күбеһе оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, араларында бер-нисә йәш ҡыҙ ҙа бар ине. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһында йәшәүсе Лилиә Ҡашҡароваға был сара тураһында әсәһе әйткән. Күптән милли кейемдәр менән ҡыҙыҡһынып йөрөгән ҡыҙ оҫталыҡ дәресендә селтәр эшләргә өйрәнеүҙән тыш, сараның икенсе өлөшөндә эпос һәм ҡобайырҙар башҡарыу буйынса үткәрелгән семинарҙы тыңлап, рухланып сығыуы тураһында ла һөйләне. Ә бына Асҡын ағинәйҙәре тауарҙы буй-буй һалып тегеп, сигелгән биҙәктәр менән матурлап эшләнгән күкрәксәнән тыш, музейҙарында ғына һаҡланған селтәрҙе лә өйрәнеүҙәренә шатланыуын белдерҙе. Ғөмүмән, оҫталыҡ дәресе барышында тырышып, дәррәү генә мәрйен теҙгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер-береһенә ярҙам итергә лә, йырларға ла өлгөрөүе һоҡланғыс бер күренеш ине.

- Был оҫталыҡ дәресендә ҡатнашыусылар барыһы ла бер маҡсатҡа хеҙмәт итә - улар беҙҙең рухиәтебеҙ һағында тора. Бөгөн беҙ ошондай сараларҙың халыҡ өсөн мөһим булыуын һәм беҙ фараз итеүгә ҡарағанда ла күберәк кешеләр битараф ҡалмауын күрҙек. Киләсәктә Өфөлә генә түгел, республиканың башҡа төбәктәрендә лә ошондай оҫталыҡ дәрестәрен ойоштороу мәсьәләһе барлығын аңланыҡ, - тине Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаева саранан ҡәнәғәт ҡалыуын белдереп.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беренсе тапҡыр үткәрелгән бындай күләмле оҫталыҡ дәресе милли кейемдәребеҙҙең үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыу йәһәтенән яһалған аҙымдарҙың иң әһәмиәтлеһе булып сығыуы ихтимал. Унда ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙар ҙур энтузиазм менән башлаған эшен ерено еткереп, тамамлап ҡуйыр һәм йәштәргә өйрәтеү сараһын да күрер, моғайын. Ни тиһәң дә, дәрестән һуң өйгә эше лә бирелде бит.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

ҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# АҠЫЛҺЫҘҘА...

## әҙәп юҡ

- Яман уйҙан яман һүҙ ярала.
- Күңел ебең ебәк булһа, телең сүбәк сәйнәмәҫ.
- Иҫерекҡә яҡшы һүҙ ни ҙә, яман һүҙ ни, бар белгәне шешә лә хәмер.
- Һәр күргәнгә ҡул һонма, йоғоно йоҡмаҫ, ҡото ла ҡунмаҫ.
- Батыр ҙа әҙәм балаһы, йәлләй белһән, ул да бахыр.
- Сарсаған сүместән, туйған уймаҡтан эсер.
- Аҡылһыҙҙа - әҙәп, йүнһеҙҙә йүн юҡ.
- Ғилем - ул бишектән башланып, ләхеттә генә тамамлана торған мөғжизә.
- Һарандың малы абруйына ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк.
- Ашын йәлләгән тешһеҙ ҡунаҡ саҡырыр.
- Ғәйбәттең ауыҙы иҡоу, ҡойроғо иҫәпһеҙ.
- Ҡайғы менән шатлыҡ мәңгелек түгел, кем түҙә - шул еңә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭШЛӘРГӘ ИРЕНГӘН...

## көләр ерҙә көрһөнгән

Ҡыҙ бала төшкән ерендә таш булып батһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә кешенән хыялланыу һәләтен тартып алһалар, мәҙәниәт, сәнғәтте тыуҙырған иң көслө сәбәптәрҙең береһе һәм яҡты киләсәк өсөн көрәшергә теләк юҡҡа сығасаҡ.

**(К. Паустовский).**

Тәбиғәттән бирәү ҙә юғары йә түбән булмай - эшләгән эштәре генә уны йә күтәрә, йә төшөрә..

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Аҡылһыҙ көйө бәхетле булыуға ҡарағанда, аҡыллы көйө бәхетһеҙ булыуың мең артыҡ.

**(Эпикур).**

Түбән кешегә ҡул ҡушлаған түбәндә ҡалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Байлыҡ туплап та унан файҙаланмаған һәм фәндәрҙе өйрәнеп тә уны ҡулланмаған был ике кеше емешһеҙ хеҙмәт итте һәм файҙаһыҙға тырышты.

**(Саади).**

Балалар - ҡартлыҡтағы йыуанысыбыҙ һәм... беҙгә ҡартлыҡты тиҙерәк яҡынайтыусылар ҙа.

**(Лайонел Кауфман).**

Хоҙай Тәғәлә кемдең вазифаһын тартып ала, шуға ул аҡылын кире ҡайтара.

**(Пшекруй).**

Дуҫтар йәшәргә ярҙам итә, әммә эшләргә ҡамасаулай.

**(Тадеуш Котарбинский).**

Һаулыҡ барлыҡ рәхәтлектәрҙән дә өҫтөн. Сәләмәт ярлы ауырыу батшанан бәхетлерәк.

**(А. Шопенгауэр).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Һалҡын бер төндә Хужа Насретдин менән ҡатыны усаҡ алдында ултыралар. Хужа китабын уҡый, ҡатыны ҡул эше менән була. Эт менән бесәй ҙә ут эргәһендә тыныс ҡына, рәхәтләнеп ята. Шул саҡ ҡатыны былай ти:**

**- Ҡара әле, Хужа, эт менән бесәй ҡалай татыу йәшәй. Ниңә беҙ ҙә шулай татыу була белмәйбеҙ икән?**

**- Уларҙы ла бер-береһенә бәйләп ҡуй әле, татыу булыр булмай ҙа ни..."**

---

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@mail.ru

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 4877
Заказ 238/12